*✓ Борон балаға исем ҡушыр алдынан муллалар уның ата-әсәһен, туған-тыумасаһын, тоҡомоноң хәл-йәшәйешен ентекләп өйрәнгән, ата-әсәнең балаларын киләсәктә кем итеп күрергә теләүен иҫәпкә алған. Ырыуҙағы, күрше-күләндәге, ауылдағы, яҡын-аралағы исем-шәрифтәрҙе барлап, ете быуын ата-олаталарының исем-ҡушаматтарының мәғәнәләрен иғтибар менән асыҡлағандан һуң ғына балаға исем биреүгә йөрьәт иткән, сөнки балаға исем ҡушыу - уның киләсәген, йәшәү рәүешен билдәләү, йәненә тәғәйен өлөшөн бүлеү, тип ҡаралған.*

***Урал МОСТАФИН.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№34 (452)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәшерен яу төрөнөң...**

иң-иң ҡурҡыныс был



2

**Иң ауыр саҡтарҙа...**

башҡорт ҡаны ярҙам итте



6

**Картайғас баҫырмын намаҙға, тиһеңдер...**

картлығыңа тиклем барып етерһеңме һуң?



12-13

**Шомло шауҡымға бирелеү...**

кризисты оҙайтыуҙың бер юлы түгелме?



15

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәмғиәтебеҙҙәге социаль тигеҙһеҙлекте нисек ҡабул итәһегеҙ? Ул барыһынан элек нимә сағылыш таба һеҙҙең өсөн?

**Рәфҡәт ҒИБӘҘӘТОВ, юрист:** Социаль факторҙар тыуҙырған социаль тигеҙһеҙлекте хәҙер тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрендә лә осратабыҙ. Мәҫәлән, миңә юлда йыш йөрөргә тура килә. Юлдарҙа хаҡы 1 миллион һумдан артыҡ булған текә сит ил машиналары көндән-көн күбәйә, уларҙың хужалары ла һөмһөҙлөгө менән айырылып тора. Был күренеш үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары аҙағында, ике меңенсе йылдарҙың башында күҙгә ташлана башланы: минең аҡсам күп, шуға ла юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙһам да, ябайыраҡ машинала китеп ултырған водителде кәмһетһәм дә ярай, тигән һымаҡ ҡылана текә машиналағылар. Был юлда үҙенә күрә ниндәйҙер дискомфорт тыуҙыра. Бигерәк тә олораҡ йәштәге ағайҙар берәй күңелһеҙ ваҡиғаға тарыуҙан ҡурҡып, һағыраҡ йөрөргә тырыша.

Ә бына йәштәрҙе бер нимә лә, бер ниндәй социаль тигеҙһеҙлектәр ҙә ҡурҡытмай, уларҙа ғәҙеллеккә ышаныс тойғоһо күберәк.

Социологияла стратификация тигән төшөнсә бар. Йәғни, бер үк килемгә, белемгә, һ.б. эйә булыусылар айырым ҡатламға - стратаға бүленә. Ҡайһы берәүҙәрҙең иғтибар иткәне барҙыр, мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһына барһаң, ундағы водителдәр күпкә тәртиплерәк һәм бер-береһенә ихтирамлыраҡ. Быны был ҡала халҡының күпселек өлөшө металл эшкәртеү өлкәһендә эшләүе һәм уларҙың килеме лә бер тигеҙ булыуы менән дә аңлатырға була. Тимәк, халыҡтың матди мөмкинлеге бер тигеҙ икән, йәмғиәттә әхлаҡи, рухи ҡиммәттәр ҙә һаҡланып ҡала.

Халыҡты социаль яҡтан тигеҙләү өсөн килемгә һалынған һалымдың күләме күп аҡса эшләүселәр һәм аҙ эш хаҡы алыусылар өсөн төрлө булырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Ғөмүмән, кешелектең яҙма тарихының һәр осоронда социаль тигеҙһеҙлек күренеше булған. Кешеләрҙең, партияларҙың, төркөмдәрҙең, кластарҙың көрәше - ҙурыраҡ социаль мөмкинлектәргә, өҫтөнлөктәргә эйә булырға тырышыу ул, тип аңлата социологтар. Ошо йәһәттән ҡараһың, әгәр ҙә тигеҙһеҙлек йәмғиәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө икән, уның ыңғай функциональ йөкләмәһе лә бар. Йәмғиәт уны үҙе тыуҙыра, сөнки ул үҫеш сығанағы ла булып тора. Иң мөһиме, байҙар һәм ярлылар араһында айырма үтә ҙурайып китергә тейеш түгел, юғиһә, был ниндәйҙер ҡаңғырыш, талаштарға килтереүе ихтимал.

**Рәхилә ИРНАЗАРОВА, мәғариф ветераны, Бөрйән районы:** Октябрь революцияһынан һуң тыуған быуын вәкиле булараҡ, минең өсөн мәктәптә, уҡыу йорттарында белем алыу, төрлө урындарҙа хеҙмәт итеү совет власы йылдарына тура килде. Был осорҙа байҙар, ярлылар булманы, бөтөн халыҡтың йәшәү кимәле бер төрлө ине. Ул ваҡытта кешенең социаль хәле уның эш хаҡына бәйле булды, бөтәбеҙ ҙә, кем эшләй - шул ашай, кем эшләмәй - шул ашамай, тигән принцип буйынса йәшәнек. Һикһәненсе йылдар аҙағында үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас барлыҡҡа килде ул социаль тигеҙһеҙлек. Бөтә кешеләрҙең тиң йәшәүенә күнеккәс, әлбиттә, минең кеүек өлкән быуын кешеләренә быны күреү бик ауыр булды. Ғүмеребеҙ буйы ышанып йәшәгән идеяларыбыҙ, принциптарыбыҙ үҙгәрҙе, хәҙер артыҡ көс һалмайынса ғына байыусылар күбәйҙе. Шул уҡ ваҡытта уҡытыусы, табип кеүек үтә лә ауыр һәм мөһим һөнәр эйәләренең эш хаҡы түбән ҡалды. Уйлап ҡараһаҡ, үтә байҙарҙың береһе лә үҙҙәренең хәләл тире менән тапҡан малға ҡарап йәшәмәй, улар байлыҡты ниндәйҙер кешеләрҙең хеҙмәте аша туплай.

Үҙем 40 йылға яҡын мәктәптә балалар уҡытып, үҙемдең 7 баламды аяҡҡа баҫтырған кешемен. Ҡартым менән гел үҙебеҙҙең көсөбөҙгә таянып йәшәнек, шуға ла мин кеше иҫәбенә йәшәгәндәрҙе ҡабул итә алмайым, был - социаль тигеҙһеҙлек кенә түгел, ә социаль ғәҙелһеҙлек тә, тип әйтер инем. Кешене аҡса ла, власть та боҙа. Бай һәм ярлы араһында ғына түгел, ә етәксе булған кешеләр ҙә үҙҙәрен тәкәббер тота. Башҡорт халҡында "Кемдең ҡулында, шуның ауыҙында" тигән мәҡәл бар. Түрә булғас, уның ҡулында, ҡулында булғас - ауыҙында ла була инде ул. Шуға ла улар бер ҡасан да ябай халыҡ менән тигеҙ булмаясаҡ.

Хәтеремдә, бер тапҡыр телевизорҙан Ельцин сығыш яһай, йәнәһе, уның ғаиләһе лә ябай халыҡ кеүек үк ҡара икмәк һәм сало менән туҡлана. Быға ышанырлыҡмы һуң инде? Икенсенән, юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙыу, тигән әйбер бар ҙа инде. Айына миллионға яҡын эш хаҡы алыусы уны йыйып ултырамы инде? Йыяһын күптән йыйып, ышаныслы урынға һалып ҡуйған ул. Аҡсаны тоҙлап та булмай, шуға ла ул был эш хаҡын нисек тә булһа туҙҙыра. Аҡсаһын ҡайҙа итергә белмәгән кеше ҡара икмәк менән генә туҡланып ултырмайҙыр бит инде. Шуға ла түрәләрҙең ил халҡы менән бер социаль ҡатламда булырға тырышыуы күҙ буяу ғына булып сыға. Власть ҙурыраҡ булған һайын кешенең байлығы, нәфсеһе лә үҫә һәм ана шул социаль тигеҙһеҙлек тигән әйбер тағы ла һиҙелә төшә.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

### МОНОЛОГ



# ТОРМОШТА ЛА, ШАШКАЛА ЛА...

## аҡты ҡаранан айырыр ҡанундар бар

**Тормоштоң ниндәй генә яғын алып ҡараһаҡ та, ундағы һәр нәмә сатраш йәки шашка таҡтаһындағылай аралашып килә: ыңғай ғына ағып бара ла ул, ҡапыл киреләнә, өйөртмәләрен күрһәтә башлай. Әммә нисек кенә булмаһын, ҡара һыҙаттан һуң барыбер аҡ һыҙат, уңышһыҙлыҡтан һуң уңыш киләсәге көн кеүек асыҡ. Бары тик ышанысты юғалтмаҫҡа, алға маҡсат ҡуйып, өмөтһөҙлөк, еңелеүҙәр, бер ярҙан икенсеһенә бәргеләнеүҙәр аша алға барырға ғына кәрәк. Бөгөнгө монолог геройы, Халыҡ-ара шашка буйынса дүрт тапҡыр донъя чемпионы, халыҡ-ара гроссмейстер Тамара ТАНҺЫҠҠУЖИНА үҙ өлгөһөндә ошо аҡ һәм ҡара төҫтәр аша тормошҡа ҡарашын белдерҙе.**


(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

*✓ Бер кем дә ғаилә тәрбиәһенә ҡыҫылмай, уға ҡаршы яу асмай. Әммә милләтебеҙ киләсәген-тамырын ҡороторлоҡ бындай яуҙы үҙебеҙгә ҡаршы үҙебеҙ асып, үҙ милләтеңде кәмһетеп, үҙеңдән көлөп ултырыу бер ниндәй ҡалыпҡа һыймай.*



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# БАЛАҢ ИСЕМЕ...
## халҡың тарихына ялғанһын

**Шәжәрәләрҙе тергеҙеү, өйрәнеү - үҙ асылын онотоп, йонсоған халыҡҡа дарыу, шул уҡ ваҡытта йәнгә шом һалған яраларҙы асырлыҡ, тамырҙарыбыҙға һеңә башлаған ағыу-зәһәрҙәрҙе лә күрһәтерлек фәһемле, шифалы изге күренеш ул.**

Шәжәрәләребеҙҙең күп төрлө йүнәлештәге тәрбиәүи әһәмиәте бәхәсһеҙ, был айырым етди һөйләшеү темаһы. Мин иһә әле ошо ҙур теманың кескенә бер (кескенә тиһәм дә, ул кеше яҙмышында бик мөһим) армытын алып ҡарамаҡсымын. Ул да булһа, балаларыбыҙға исем ҡушыу мәсьәләһе. Исем есемдең яҡлаусыһы, һаҡлаусыһы, иптәше, кәңәшсеһе, әйҙәүсеһе, өндәүсеһе, йөҙө һәм намыҫы булған, һүҙҙең тәьҫирле сихри көсөн белеп, ышанып ҡушҡандар исемде. Шәжәрәләребеҙҙе өйрәнеү беҙгә был өлкәлә ысын мәғәнәһендә ҡатлам-ҡатлам булып ятҡан хазина донъяһын аса, тип әйтер инем. Иғтибар итһәгеҙ, шәжәрәләребеҙҙең күбеһе Мөхәммәт, Миңлеәхмәт, Ишмырҙа, Ҡотлоәхмәт, Йәнбирҙе һ.б. шуның кеүек яңғырауыҡлы һәм тәрән мәғәнәле саф башҡорт исемдәре менән башлана. Үкенескә күрә, хәҙерге быуын исемдәренә килеп еткәс, аптырап, тертләп китәһең: Хоҙай ҡушмаған, ҡолаҡҡа ятмаған яһалма исемдәр, башҡа халыҡтарҙан сәлдерелгәндәр - ниндәйҙәре генә юҡ! Тик саф башҡорт исемдәре генә аҫыл таш бөртөгөләй һирәк осрай. Борон балаға исем ҡушыр алдынан муллалар уның ата-әсәһен, туған-тыумасаһын, тоҡомоноң хәл-йәшәйешен ентекләп өйрәнгән, ата-әсәнең балаларын киләсәктә кем итеп күрергә теләүен иҫәпкә алған. Ырыуҙағы, күрше-күләндәге, ауылдағы, яҡын-аралағы исем-шәрифтәрҙе барлап, ете быуын ата-олаталарының исем-ҡушаматтарының мәғәнәләрен иғтибар менән асыҡлағандан һуң ғына балаға исем биреүгә йөрьәт иткән, сөнки балаға исем ҡушыу - уның киләсәген, йәшәү рәүешен билдәләү, йәненә тәғәйен өлөшөн бүлеү, тип ҡаралған. Шуға күрә лә балаға исем ҡушыр алдынан һәр ата-әсә үҙ шәжәрәһен ентекләп ҡарап сыҡһын ине. Шәжәрәләге башҡорт исемдәре - халҡыбыҙ тарихы икәнен онотмайыҡ.

**Урал МОСТАФИН,**
**яҙыусы.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЙӘШЕРЕН ЯУ ТӨРӨНӨҢ...
## иң-иң ҡурҡынысы был

**"Киске Өфө"лә Әхмәр Үтәбаевтың йәшерен яу тураһындағы мәҡәләһен уҡып, төрлө уйҙарға баттым. Сәбәбеме? Беренсенән, мәҡәлә бик төплө яҙылған. Икенсенән, йәшерен яуҙың төрҙәре иҫ китмәле күп. Шулар араһындағы иң ҡурҡынысы, минең уйымса, үҙебеҙҙең үҙебеҙгә ҡаршы яу булыуыбыҙ. Яу булыу ғына түгел, шул яуҙың ни икәнен, ниндәй һөҙөмтәләргә килтерәсәген аңламайынса, мәртәбәгә һанауыбыҙ, күкрәк һуғып маҡтаныуыбыҙ.**



Уратып-суратып тормайынса, булған хәлде яҙайым. Яңыраҡ юғары һәм унан да юғарыраҡ белемле әһелдәр араһында бер мәжлестә булдым. Һүҙ, ғәҙәттәгесә, балаларыбыҙ хаҡында башланды. Күптән күрешмәгәнбеҙ, һөйләшер һүҙ, берберебеҙҙе һөйөндөрөрлөк яңылыҡтарыбыҙ күбәйеп киткән. Алмаш-тилмәш һүҙ алалар, телмәр тоталар...

Бына бер ҡунағыбыҙ ҡыҙының инглиз егетенә кейәүгә сығыуын әйтте. Әйтеп кенә ҡалманы, инглиздәрҙең башҡорт егеттәре һымаҡ эсеп, ғаиләһен хәстәрләмәй йөрөмәүен, ә иҫ китмәле донъясыл, бик мәҙәниәтле, әҙәпле, итәғәтле булыуын маҡтап алып китте. Тағы бер ҡатын ике ҡыҙының да төрөк егеттәрен һайлауын белдерҙе. Икенсе бер ҡатын, уларға яуап итепмелер: "Үҙебеҙҙәге урыҫ егеттәре бынамын тигән, ҡыҙҙарығыҙҙы урыҫ егеттәренә бирегеҙ", - тип ысҡындырҙы. Ауыҙыма ҡапҡан икмәкте йота алмай, бөтөн тәнем ҡалтыранып, тынислана алмай аҙапландым. Улай ҙа була икән - тамаҡ һыҡыны ла ҡуйҙы. Мин ауыл мәктәбендә ғүмерем буйы тарих уҡыттым, һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә "Башҡортостан тарихы" ингәс, ихласлап ошо дәресте алып бара башланым. Был башҡорт бисәләре (ни өсөндөр ирҙәр өндәшмәне, ә бит улар телмәрендә башҡорт ирҙәре кәмһетелә ине) кейәүҙәрен маҡтаған мәлдә, күҙ алдымдан башҡорт яуҙарын үткәрҙем. Илем, телем, ерем, халҡым, киләсәгем, милләтем, тип баш һалған, ҡабырғаларынан аҫтырылған, ауылы-ауылы менән яндырылған, ҡаҙыҡтарға ултыртылған атай-олатайҙарыбыҙ рухы алдында тубыҡландым. Күңелемдән тубыҡландым, шул уй тамағыма төйөр булып тығылды ла ҡапҡан ризығымды йота алмай ултырҙым...

- Һинекеләр ҡайҙарҙа? - тип, минән дә һорар сират етте. Ҡатыным ауылда ҡалғайны, мин ҡунаҡҡа осраҡлы ғына барып юлыҡҡайным.

- Ҡыҙҙарымды башҡа милләткә ҡол итеп тоттороуҙан һаҡлаған Хоҙайға рәхмәт. Ҡыҙҙарымды илһөйәр итеп тәрбиәләгән ҡатыныма рәхмәт. Инде Раббым ейән-ейәнсәрҙәремде лә ул афәттән һаҡлаһын! - тинем яуап итеп.

- Хоҙай алдында барыбыҙ ҙа бербеҙ. Хоҙай өсөн милләт юҡ, - тине ике кейәүе ике төрлө милләттән булған ҡатын.

- Библияла ла, Ҡөрьәндә лә Хоҙайҙың ырыуҙар һәм халыҡтарҙы айырым яралтыуы тураһында әйтелгән. Шуны белмәйһегеҙҙәме ни?

Ҡатын өндәшмәне. Әммә икенсеһе, ҡыҙҙарын төрөккә биргәне, һөжүмде дауам итте.

- Ауылда йәшәйбеҙ, тиһегеҙ бит. Ауылда ни әллә кемде һайлап булмай инде...

- Иң кинйә улым Мәскәү дәүләт университетын тамамланы. Әле уға кәләш әйттерергә йөрөйбөҙ. Киленебеҙ ҙә Мәскәүҙә уҡыған Бөрйән башҡорто, - ти ауыҙын яптым ябыуға был ҡатындың. Әммә... Бындағы юғары белемле, хатта профессор дәрәжәһенә еткән ҡунаҡтарға ни ҙә булһа аңлатыу йәки хаталарын таныттырыу ғәмәлдә тормошҡа ашмаҫ ынтылыш икәнен аңлағайным инде...

Дөрөҫ, Хоҙай алдында барыбыҙ ҙа бербеҙ. Бер милләт тә бер-береһенән кәм дә, артыҡ та түгел. Һәр милләт матур, аҡыллы, зирәк, әҙәпле, тәрбиәле. Һәр милләт йәшәргә хаҡлы. Әммә ни өсөн башҡа милләт вәкилдәрен башҡортто кәмһетеү иҫәбенә маҡтарға? Бер кем дә, бер сәйәсәт тә ғаилә тәрбиәһенә ҡыҫылмай, уға ҡаршы яу асмай. Әммә милләтебеҙ киләсәген-тамырын ҡороторлоҡ бындай яуҙы үҙебеҙгә ҡаршы үҙебеҙ асып, өҫтәүенә, ошо хатаны - Хоҙай юлынан тайпылышты - аҡлар өсөн, үҙ милләтеңде кәмһетеп, яманлап, асылда иһә, тәғәйен үҙеңдән көлөп ултырыу бер ниндәй ҡалыпҡа һыйырлыҡ эш түгел. Ябай ғына шул хәҡиҡәтте лә төшөнмәйҙәрме икән ни! Тарихҡа төшөп уйланмағанда ла эргәндә ултырған иреңдән, һине үҫтергән атай-әсәйеңдән, ниһайәт, үҙеңдән көлөү, мыҫҡыллау бит был. Башҡорт ирҙәре, башҡорт егеттәре, ысынлап та, ер йөҙөндәге бөтөн милләт егеттәренән дә кәмерәкбеҙме ни беҙ? Ҡыҙҙарыбыҙ кемдәргә генә кейәүгә сыҡмай ҙа, кемдәргә генә бала үҫтермәй хәҙер?!

Береһенән-береһе уҙҙырып, кейәүҙәренең, килендәренең милләтен маҡтай-маҡтай ултырып ҡалды ҡунаҡтар. Мин ҡайтып киттем. Тик ҡайҙа барғанымды ла, ҡайһы яҡҡа атлағанымды ла тойманым. Бер аҙ атлағас ҡына: "Ҡайҙа барам әле мин?" - тип, күтәрелеп ҡараным да урам исемен уҡыным. Барыр йүнәлешемде таптым. Һеҙ ҙә, ултырҙаштар, табындаштар, **"Ҡайҙа барабыҙ һуң беҙ?"** тигән һорау менән /әгәр төҙөлгән булһа/ ырыу шәжәрәгеҙгә күҙ ташлағыҙсы!..

**Ишмырҙа ТАШБУЛАТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2012 йылда Башҡортостан бюджеты социаль йүнәлешле булып ҡаласаҡ. Аҡсаның иң ҙур өлөшөн мәғарифҡа тотоноу ҡаралған - 31,3 процент. 20,2 проценты иһә - һаулыҡ һаҡлау өлкәһен (мотлаҡ медицина страховкаһын иҫәпкә алып), 12,8 проценты - социаль сәйәсәтте, 3,2 проценты мәҙәниәтте финанслауға йүнәлтеләсәк. Ағымдағы сығымдарҙың яртыһынан ашыуы эш хаҡына һәм республиканың норматив йөкләмәләрен финанслауға - граждандарға һәр төрлө социаль түләүҙәргә һәм компенсацияларға китәсәк.

✓Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшереү үҙәгенә ИСО 22000:2007 Халыҡ-ара стандарт сертификаты тапшырылды. Шуның менән коллектив продукцияһының юғары сифатына тағы бер тапҡыр раҫлау алды. Әле алдынғы илдәрҙең аҙыҡ-түлек предприятиеларында аҙыҡтың сифаты һәм хәүефһеҙлеге менән идара итеүҙең төп моделен тап ошо ИСО 22000:2007 Халыҡ-ара стандарты нигеҙендәге менеджмент системаһы тәшкил итә лә инде.

✓Әле республиканың барлыҡ райондарында ла ҡыҙыу ураҡ бара. Республикала барлығы 393 мең гектар майҙанда иген урылған. Ураҡ кампанияһы башланғандан алып бураларға 700 мең тонна ашлыҡ һалынған. Архангел, Ауырғазы, Баҡалы, Бәләбәй, Бишбүләк, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Көйөргәҙе, Саҡмағош райондарында ашлыҡ майҙандарҙың 25-41 проценттында һуғылған. Мәләүез районы хужалыҡтарында гектарынан 30,7 центнер иген, ә Өфө районы хеҙмәтсәндәре 30 центнер уңыш алыуға өлгәшкән. Республикала уртаса уңыш күрһәткесе - 21 центнер.

✓Уҙған аҙнала Өфөнөң икенсел торлаҡ баҙарында хаҡтар 0,2 процентҡа артып, бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 46,81 мең һумға етте. Өс бүлмәле фатирҙар 0,1 процентҡа ҡиммәтләнгән. Әле баш ҡалалағы иң арзан бер бүлмәле фатир 1 миллион 250 мең һумға тәҡдим ителә. Гвардия урамында урынлашҡан йорттағы был фатирҙың дөйөм майҙаны - 37 квадрат метр. Иң ҡиммәтле биш бүлмәле фатир 20 миллион һумға һатыла. Ул Достоевский урамында, майҙаны - 202,4 квадрат метр. Иң арзан бүлмә 580 мең һумға тәҡдим ителә.

*✓ Мәсьәләгә балаһын ҡоҫоп ашатыусы бүреләр күҙлегенән ҡарағанда, бындай "ҡомһоҙлоҡта" үҙеңдән һуң килгән быуынды хәстәрләү ихтыяжы ятыуын да күрергә була.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БУЛҺА - БҮРЕЛӘЙ...

## булмаһа - сүреләй



**Был әйтем кешене тормош-көнкүреш өсөн кәрәкле булған әйбер, кейем, сеймал һәм аҙыҡ-түлек менән һаҡсыл ҡулланыу зарурлығы хаҡында иҫкәртә кеүек. Әммә милли идеяға торошло төпкәрәк һалынған мәғәнәһе лә бар уның.**

Күп кенә үҙенсәлекле милли һыҙаттарыбыҙҙың республикабыҙҙан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ йөҙөндә һаҡланып ҡалыуына шаһит булғаным бар. Башҡортостанда йәшәүсе башҡорттар ундай һыҙат-сифаттарға эйә түгел, тип әйтмәйем, шулай ҙа, әллә инде милләтте һаҡлаусы дәүләт механизмы ҡурсауы булмауы арҡаһындамы, йәмғиәт, тәбиғәт менән йөҙмә-йөҙ килеп, көрәшеп йәшәгәнгәме, ситтәге милләттәштәрҙә яһалмалыҡ әҙерәк, тойғолары сафыраҡ һымаҡ. Гәзитебеҙҙең быйылғы 20-се һанында Силәбе башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы, Рәсәйҙең көслө атлеттары федерацияһының вице-президенты Эльбрус Ниғмәтуллин ("Көслөләргә һыйыналар, йәки Яңы башҡорт имиджы тураһында"): "Тап ошо беҙҙе көслө итә лә инде. Баяғы ҡойма тураһында әйткәйнек. Дәүләт - тап ошо ҡойма ла инде. Беҙҙе һаҡлаясаҡтар, беҙҙең телевидениебыҙ, гәзит-журналдарыбыҙ бар, уҡырға ингәндә ниндәйҙер өҫтөнлөктәр бирелә, тип тынысланырға һәм бер нәмә лә эшләмәҫкә мөмкин. Ә республиканан ситтә быларҙың береһе лә юҡ, киреһенсә, барыһын да үҙеңә яулап алырға тура килә. Әлбиттә, бындай шарттарҙа юҡҡа сығыуың да ихтимал. Әммә мин, беҙ юғалып ҡалманыҡ һәм иң ауыр ваҡыттарҙы үттек, тип иҫәпләйем..."- тип, республиканан ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың үҙенсәлекле бер һыҙатын аса. "Беҙҙең мәктәп тәҙрәләренең ҡорғаны юҡ, әммә беҙ уның өсөн ҡайғырмайбыҙ. Уның ҡарауы, өҫтөбөҙҙә милли кейемебеҙ бар. Рухыбыҙҙы тәҙрә ҡорғаны түгел, милли кейемебеҙ һаҡларға булышлыҡ итә", - тип яуаплағандар республикабыҙҙан үҙҙәренә ҡунаҡҡа барғандарға Ҡорған башҡорттары. Ә бит улар яуабын таба белгән, тәҙрә ҡорғандары булмауында һис кенә лә был өлкәнең Рәсәй Федерацияһында социаль-иҡтисади яҡтан артта ҡалыуын сәбәп итеп килтермәгәндәр.

Ырымбур өлкәһенең Туҡ-Соран буйында билдәле балалар яҙыусыһы Сөләймән Муллабаевтың 70 йәшлек юбилейына бәйле әҙәби саралар үткәреп йөрөп ҡайтышлай, йомош-юл төшөп, Плешан ауылында йәшәүсе милләттәшебеҙ, урындағы милли-мәҙәни сараларҙы ойоштороусы фиҙаҡәр дуҫыбыҙ Гөлсинә Баязитованың өйөнә 10-15 минутҡа ғына һуғылып киттек. Эңер ваҡыты ине. Шул саҡта йорт хужабикәһенең беҙҙе ҡунаҡ итә алмағаны өсөн өҙгөләнгәнен күрһәгеҙ! Тиҙ генә, өтәләнеп, йортоноң бер өлөшө итеп һалынған саунаһын тоҡандырып ебәрҙе, табын хәстәрләргә тотондо, ә беҙҙең бер генә минут та ваҡытыбыҙ юҡ. Бер яҡтан, беҙ тиҙерәк Өфөгә ҡайтып етергә ашығабыҙ, икенсе яҡтан, ул ни эшләргә, нимәгә тотонорға белмәй үрәпсей. Шул саҡта ул, беҙҙең мунсаға һәм табынға ҡалмаясағыбыҙҙы тамам аңлағас, ихатаһында туйтаңлап йөрөгән һимеҙ өйрәктәрҙе баҫтырырға тотонмаһынмы. Сираттағы "ҡорбанын" ҡыуып тотоп сала ла, тоҡҡа тыға, артабан тағы бер ҡоштоң артынан саба. Беҙ машина водителе менән барлығы биш кеше инек, һәммәбеҙгә әҙерләнә ул үҙенсәлекле Плешан күстәнәсен. Беҙҙең ҡаршы төшөүҙе лә, уңайһыҙланыу-оялыуҙы ла бар тип белмәне. Етмәһә, әҙәм рәүешле ҡунаҡ итеп ҡайтара алмағаны өсөн үкенес белдереп оҙатып тороп ҡалды эскерһеҙ милләттәшебеҙ...

Милләттәштәребеҙ йәшәгән ауыл-ҡалалар буйлап йөрөгән саҡта ошоға оҡшаш мөнәсәбәткә йыш тап булғаным бар, әммә Ырымбур өлкәһендәге был ваҡиға хәтергә нығыраҡ уйылды барыбер. Сөнки мин тап унда ихласлыҡтың, эскерһеҙлектең, ҡунаҡсыллыҡтың бер үк йөкмәткегә эйә булған синоним һүҙҙәр икәнлеген аңланым. Бындай осраҡ өсөн халҡыбыҙҙа "Булһа - бүреләй, булмаһа - сүреләй" тигән махсус әйтем дә бар. Һуңыраҡ тәжрибәле һунарсыларҙан бүреләргә ҡағылған бер хәҡиҡәтте лә ишеттем. Баҡтиһәң, бүреләр ҡорбанына аяуһыҙ рәүештә ташланып, мулыҡҡан саҡта һолғолап ит киҫәктәрен йотҡанда үҙҙәренең тамағынан ғәйре балаларын ҡайғыртуйындыра икән. Ошо хәл генә лә әйтемдең "булһа - бүреләй" тигән өлөшөнөң икенсе төрлө мәғәнәһе барлығын да аңлата түгелме? Ғөмүмән, ашһыуға мул ҡуллы булыусыларҙың был халәте бер яҡтан уларҙың, әйткәнемсә, күңел киңлеген, икенсе яҡтан ҡарағанда хәлле йәшәүен дә аңлаталыр. Өсөнсөнән, мәсьәләгә балаһын ҡоҫоп ашатыусы бүреләр күҙлегенән ҡарағанда, бындай "ҡомһоҙлоҡта" үҙеңдән һуң килгән быуынды хәстәрләү ихтыяжы ятыуын да күрергә була. Әйтәйек, аҫҡы андағы ошондай маҡсат: "Мин башҡаларға ниндәй мөнәсәбәттә булһам, улар, ваҡыты еткәс, минең балаларыма ла яҡшылыҡ килтерергә тырышасаҡ бит", - тигән аңлау.

Әлбиттә, булғанда - бүреләй, булмағанда - сүреләй булып ултырыу йәшәр өсөн иң кәрәкле һаҡсыллыҡ, сама тойғоһоноң юҡлығын да аңлата. Ҡулына мул ғына аҡса йә эш хаҡы алған берәүҙең уны бер көн эсендә шешә төбөнә төшөрөп йотоуы хаҡында ла әйтергә була быны. Әммә, беҙҙенсә, әйтемдең ошондай туранан-тура аңлашылған мәғәнәһе генә шундай кире мәғәнәгә эйәлер. Әммә балаларын ҡоҫоп ашатыусы бүреләрҙе күҙ алдына баҫтырһаң, әйтемдең бына ошондай башҡа төрлө мәғәнәләре лә асылып китә.

Ни генә тимә, һыҡмыр, һаран, үҙ-үҙен сикләп йәшәгән, ҡырҡҡанда ла ҡаны сыҡмаҫ кеше "булғанда - бүреләй", тип йәшәй алмайҙыр ул. Тауҙай байлығың булып, сүреләй йәшәү ҙә мәғәнәһеҙлек. Муллыҡҡа - сумартлыҡ, ҡунаҡсыллыҡҡа киң күңеллелек хас. Ҡыҙыҡ өсөн бер тәжрибә үткәреп ҡарағыҙ. Бының өсөн өҫтәлгә стакан ҡуйығыҙ ҙа, шул һауытҡа бер биҙрә һыуҙы һыйҙырып ҡарағыҙ. Нисек итеп һыйҙырырһығыҙ икән? Биҙрәләге һыуҙы һуңғы тамсыһына тиклем стаканға ҡойор өсөн бәләкәй һауыт тулып, бер туҡтауһыҙ ситкә түгелеп торорға йә булмаһа һыу менән тулған бер һауытты икенсе урынға бушатып торорға кәрәк буласаҡ. Ә бит биҙрәләге һыу һине көтөп тормаясаҡ. Ошо күҙлектән генә ҡарағанда ла был әйтемдә хәҙерге көндә, әлеге мәлдә тулы ҡанлы тормош менән йәшәп ҡалыу зарурлығы хаҡындағы фәлсәфәүи фекерҙе табырға була түгелме?

...Яңыраҡ ҡайнар монарға төрөнгән эҫе Өфө урамдары буйлап китеп барһам, юлымда кеүәҫ мискәһен күреп, кеүәҫ эсергә булып туҡталдым. Кеүәҫ һатыусы ханымды ҡараштарынан шундуҡ таныным - ҡасандыр беҙгә өйрәктәрен тоҡҡа тултырып ебәреүсе Плешан ауылы аҫабаһы Гөлсинә Баязитова. Шул уҡ ҡараштар, шундай уҡ ихласлыҡ, шундай уҡ эскерһеҙлек һәм ҡунаҡсыллыҡ. Баҡтиһәң, ул Өфө дәүләт сәнғәт академияһының режиссура бүлеген ситтән тороп тамамлаған, балалары яҙмыштарын Башҡортостанға бәйләү сәбәпле, ауылындағы йортон һатып, Өфөгә күсеп килгән икән. Режиссер булыуына ҡарамаҫтан, кеүәҫ һатып тороуына ла һис тә кәмһенмәй, киреһенсә, Башҡортостанға күсеп килеүенә ихлас йылмайып, һәр үткән кешегә күңел нурҙарын һибеп, ҡояштай балҡып, һыуһындарын ҡандырып кеүәҫ менән һыйлап тора. Үҙе әйтеүенсә, уның янына башҡорт милләтле кешеләр, бигерәк тә ижад әһелдәре йышыраҡ туҡтала икән. Ҡояшҡа барыбыҙ ҙа ынтылабыҙ шул...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мөлөков Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә 23-25 августа Өфөлә Нанотехнологиялар конгресы үткәреләсәге хаҡында хәбәр итте. Унда күләмле наноструктур материалдар менән шөғөлләнеүсе 200 ғалим һәм сәнәғәтсе ҡатнашасаҡ.

✓Республикала "Блогер - сүп-сарға ҡаршы" Бөтә Рәсәй акцияһына ҡушылып, экологик шәмбеләр ойошторола. Сара барышында блогерҙар ғына түгел, тирә-яҡ мөхиттең торошона битараф булмаған барлыҡ кешеләр ҡала биләмәләрен, йылға буйҙарын, парктарҙы сүп-сарҙан таҙартасаҡ. Был арала Өфөлә тағы ла ике экологик акция уҙғарыу күҙаллана. Сарала ҡатнашыусылар Трамплин районындағы урман һәм Ҡариҙел йылғаһы буйындағы пляжды тәртипкә килтерәсәк.

✓Йыл башынан алып Башҡортостанда дөйөм майҙаны 884,8 мең кв. метрлыҡ 9500 фатир сафҡа индерелгән. Был уҙған йылға ҡарағанда 102,7 процентҡа күберәк, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Шәхси йорттар төҙөлөшө республикала торлаҡ өлкәһен үҫтереүҙең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып ҡала. Ете айҙа ғына Башҡортостан халҡы дөйөм майҙаны 717 мең кв. метрлыҡ 6696 шәхси йорт төҙөгән. Шәхси төҙөүселәр өлөшөнә файҙаланыуға тапшырылған торлаҡтың 81 проценты тура килә.

✓Башҡортостан журналистарының Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына дәғүә итеүселәрҙән 2010 йылдың сентябренән 2011 йылдың авгусына тиклем донъя күргән материалдар һәм документтар ҡабул ителә башланы. Премия алыуға баҫма матбуғат, интернет-баҫма, радио һәм телевидение вәкилдәре дәғүә итә ала. Комиссия төрлө жанрҙағы эштәрҙе, шул иҫәптән фотоларҙы һәм китап булып сыҡҡан мәҡәләләр йыйынтығын да ҡабул итә. Материалдарҙы 1 сентябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13 адресы буйынса Башҡортостандың Журналистар союзына ебәрергә. Телефон/факс: (347) 276-42-66.

✓Ҡытайҙа Бөтә донъя Йәйге универсиада-2011 дауам итә. Рәсәй штангасыһы, Башҡортостан физик культура институты студенты, Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры Ринат Кирәев 85 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында чемпион булды.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

**Рәсәй Федерацияһы Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе әсәлек (ғаилә) капиталы сертификаты биреү хаҡында 110 мең ҡарар ҡабул иткән. Ағымдағы йылдың тәүге ярты йылында 12 меңдән ашыу сертификат тапшырылған. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәй региондары араһында тәүге урындарҙың береһен биләй.**

# ИКЕ БАЛАЛЫЛАР...

## аҡса алып та ҡыуана

Рәсәй Федерацияһы Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров белдереүенсә, республиканың ҡала һәм район пенсия бүлексәләренә әсәлек капиталын ҡулланыу ғаризаһы менән һәр өсөнсө сертификат эйәһе мөрәжәғәт иткән. Әсәлек капиталын Башҡортостан халҡы күбеһенсә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға тотона - 29385 ғариза. Быйыл был маҡсатҡа былтырғы йыл менән сағыштырғанда 10 тапҡырға күберәк аҡса тотонолған. Үҙ капиталын шәхси йорт төҙөүгә, төҙөкләндереүгә һәм һатып алыуға тотонған 7565 сертификат эйәһе был эште кредит һәм займдар йәлеп итмәйенсә генә башҡарып сыҡҡан. Был алым бигерәк тә ауыл ерендә киң ҡулланыла. Ҡайһы бер райондарҙа һәр алтынсы сертификат эйәһе үҙ капиталын ошо маҡсатҡа йүнәлткән.

Әсәлек капиталына шәхси йорт төҙөү йәки төҙөкләндереү эштәрен подрядсы-ойошма йәлеп итмәйенсә башҡарыу, шулай уҡ төҙөлгән йорттың сығымдарын ҡаплау өсөн тотоноу мөмкинлеге 2010 йылдың декабрь айынан, ҡануниәткә үҙгәртеүҙәр индерелгәндән алып, барлыҡҡа килде. РФ Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы бүлексәһе тарафынан торлаҡ яҡшыртыуҙың төрлө йүнәлештәренә әсәлек капиталы буйынса 7,6 миллиард аҡса күсерелгән. Шулай уҡ 222 сертификат эйәһе төрлө уҡыу йорттарында балаларын уҡытыуға әсәлек капиталы аҡсаһын тотонған, ә 1,2 миллион һум әсәнең буласаҡ пенсияһының тупланма өлөшөн формалаштырыуға ебәрелгән.

12 мең һумға тиклем бер тапҡыр бирелә торған түләү менән 2010 йылда 65814 сертификат эйәһе ҡулланһа, быйыл иһә был һан 70989-ға еткән. Түләүҙәрҙең дөйөм суммаһы - 1 миллиард 636 миллион һумдан ашыу.

**РФ Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе матбуғат хеҙмәте.**

ФОТОҒӘЙЕПЛӘҮ

# ҺИН ҺЫНДЫРҒАН МУЙЫЛ...

**"Алла кеше менән тәбиғәт аша бәйләнеш тота", тигән бер аҡыллы кеше. Әммә күптәр был хәҡиҡәтте белмәйме, әллә һанламаймы -Хоҙай менән аралашсы булып, кешелекте ҡурсалап торған, һыйындырған, туйындырған, кейендергән тәбиғәтен вәхшиҙәрсә ҡыйратыуҙы, талауҙы дауам итә.**

Шундай миҫалдарҙың береһенә әле яңыраҡ ауылыма ҡайтҡанда (Ишембай районы Ҡанаҡай ауылы) үҙем шаһит булдым. Һәләүек буйындағы туғайлыҡта муйыл уңған булған, күрәһең, эре-эре ағастарҙы балта менән ауҙарып, ботарлап, емешен йыйып алғандар. Был туғайҙарҙа беҙ ҙә бала саҡта муйыл тирә инек. Тик әсәйҙәр, әбейҙәр беҙгә яңылыш ҡына ла ағасты һындырырға рөхсәт итмәй ине. Ботаҡтарҙы ваҡлап ҡына һындырып тирә инек муйылды...



Тәбиғәткә - йылғаларыбыҙ, урмандарыбыҙ, тауҙарыбыҙға вәхшиҙәрсә, ҡырағайҙарса мөнәсәбәт менән ҡарашһағыҙ, битараф ҡына уҙып китмәгеҙ, йәмәғәт. Бәлки, емешен йыйып алыр өсөн генә тиҫтәләп йылдар буйы үҫкән ағасҡа балта күтәргән кеше ул ҡәҙәре яуыҙ да түгелдер, ә наҙанлыҡтан, Аллаһы Тәғәлә биргән бүләктең баһаһын аңламағандан эшләйҙер быны. Аңлатайыҡ, тәрбиәләйек, әйтә йөрөйөк.

Оло быуын өйрәтмәгәс, тәрбиәләмәгәс, йәш быуын, мәҫәлән, ағастарҙы һындырырға ярамағанын ҡайҙан белһен? Бына тағы бер миҫалға юлыҡтым. Кисен эштән ҡайтырға сыҡһам, 4-5 кенә йәшлек өс малай редакция урынлашҡан йорт алдындағы бер ағасты әйелткән дә, ботаҡтарын һындырырға итә, тик булдыра алмайҙар. "Ни эшләйһегеҙ, малайҙар, нигә ағастарҙың тәнен ауырттыраһығыҙ? Уларҙы хәҙер илатаһығыҙ бит!" - тип эргәләренә барҙым. Малайҙар шунда уҡ ағасты ысҡындырҙы ла, аптырап ҡарап торалар. "Ағастың да тәне ауырта бит, һеҙ шуны белмәйһегеҙме ни?" - тим тағы. "Юҡсы..." тип яурын һелкетә малайҙар. Шунда эргәбеҙгә малайҙарҙың береһенең атаһы килде. "Атай кеше, әйтегеҙ әле улығыҙға ағастар ҙа ауыртына һәм илай белә икәнен", - тим. Ярай әле атай кеше минең әйткәндәремде ялғап алып китте. Артабан малайҙарҙың һорауы уға йүнәлделәр.

Кешенең тәбиғәткә алама мөнәсәбәтен күрәһегеҙ икән, өндәшмәй ҡалмағыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт, ул факттарҙы фотоға төшөрөп, беҙҙең редакцияға ла ебәрһәгеҙ, тағы ла яҡшы. Кемдәлер фашлау түгел маҡсат, башҡаларға фәһем, тәрбиә биреү. Хаттар көтәбеҙ.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

БОРСОҒАН МӘСЬӘЛӘ

# ЕР ШАРЫБЫҘ...

## сүп-сар батшалығына әйләнмәһен

**Һуңғы ваҡытта ҡалаларҙа ғына түгел райондарҙа, ауыл биләмәләрендә рөхсәт ителмәгән урындарҙа сүп-сар оялары ҡалҡып сыға башланы.**

Республика буйынса ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары (ТБО) түгелгән һәм дөйөм майҙаны 2 мең гектар тәшкил иткән 3 мең урын бар. Йән башына иҫәпләгәндә, бер кешегә йылына 250-300 килограмм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары тура килә. Әгәр үҙ артыбыҙҙан таҙартырға уйламаһаҡ, тиҙҙән сүплек батшалығында йәшәйәсәгебеҙ көн кеүек асыҡ. Сөнки дөйөм алғанда йылына 150 мең тонна макулатура, 70 мең тонна ҡатырға, 36 мең текстиль әйберҙәр, 107 мең тонна башҡа сәнәғәт ҡалдыҡтары сүплеккә түгелә. Бынан тыш, электрон ҡалдыҡтарҙың артыуы ла күҙгә ташлана. Һөҙөмтәлә Башҡортостан илдең 83 төбәге араһында ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары майҙандары ишәйеүе буйынса 41-се урында тора.

Шуғалыр ҙа, бәлки, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары менән идара итеү системаһын камиллаштырыуға йүнәлтелгән республика маҡсатлы программаһы ҡабул итергә йыйыналар. Программа 2020 йылға тиклем иҫәпләнәсәк һәм уны тормошҡа ашырыуға 7,5 миллиард һум аҡса бүленәсәк. Программаны тормошҡа ашырыу ике этапта барасаҡ. Тәүгеһендә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын айырым йыйыу буйынса тәжрибә үткәреләсәк һәм территорияларҙы таҙартыуҙың генераль схемаһы төҙөләсәк. Икенсе этапта инде ҡалдыҡтарҙы ҡайтанан эшкәртеү буйынса производство төҙөү планлаштырыла. Шулай уҡ 50 километр араһыҡты хеҙмәтләндергән муниципаль-ара сүп-сар полигондары, ҡайһы бер ауылдарҙа мини сүп-сар йыйыу урындары төҙөләсәк.

ЙӨҘӨН КҮРЕП...

# НИ ЭШЛӘРГӘ?




Рус яҙыусыһы Чернышевский үҙенең бөйөк романына юҡҡа ғына ошондай атама бирмәгәндер. Ул, бәлки, быуаттар үткәс, Рәсәйҙә наҙандарҙың кәмеүенә ҙур өмөт бағлағандыр.




Кем белә... Шулай ҙа наҙанлыҡ кәмемәй. Урамдар исеме лә, алтаҡталар ҙа, аҙыҡ-түлек ярлыҡтары ла - барыһында ла табып була хатаны. Башҡорт телендә генә түгел, рус телендә лә етерлек улар. Беҙҙә сит телдә лә яҙыуҙар күп, уларҙы ла дөп-дөрөҫ яҙылған тип кем гарантия бирә?

Әйткәндәй, сифат сертификаты менән етештерелгән бынау һалманың ҡабындағы яҙыуҙарҙы уҡығас, уны ашаусы ни уйлай икән? Был ризыҡ, моғайын, уның тамағына арҡыры торалыр ул?

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә яңы уҡыу йылына әҙерлек сиктәрендә 53 мәктәптә, 53 балалар баҡсаһында һәм туғыҙ өҫтәмә белем биреү учреждениеһында капиталь ремонт бара. Был маҡсатҡа 85 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. Шулай уҡ туғыҙ мәктәп ашханаһында ремонт алып барыла. Мәғариф учреждениеларының барыһында ла янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙоуҙы бөтөрөүгә, эргәтирәһендәге территорияны төҙөкләндереүгә һәм йылытыу миҙгеленә әҙерлеккә айырым иғтибар бирелә. Бөгөн йылытыу системаларын гидравлик һынау Өфөнөң 412 белем биреү учреждениеһында үткәрелгән, был дөйөм иҫәптең 96,7 процентын тәшкил итә.

✓Гидромет хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда көндәр һыуыта төшәсәк һәм көндөҙ 20-23 градус йылы буласаҡ. Төндә термометр бағанаһы 6 градусҡа тиклем төшөүе бар. Айырым райондарҙа был ял көндәрендә ямғыр яуыуы ихтимал.

✓М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 30 августа Ураҙа ғәйетенә арналған "Изге ғәмәл - мең сауап" тип аталған тамаша тәҡдим итә. Әйткәндәй, театр бинаһында никах теркәү тантаналары электән үткәрелә килә. Быйна әле театр коллективы никахтарын теркәүсе йәштәргә башҡорт туй йолаһында ҡатнашыу мөмкинлеге тыуҙыра. Йәштәргә ысын театр костюмдары тәҡдим ителә, улар театр артистары менән бергә бәләкәй спектаклдең геройҙарына әйләнә, ә тантанала ҡатнашыусы туғандары залдан урын алып, сәхнәлә барған тамашаны күҙәтә.

✓Миграция хеҙмәте тарафынан бөтәһе 917 эш биреүсенең сит ил эшселәрен эшкә законлы рәүештә, әллә законһыҙмы йәлеп итеүе тикшерелгән. Операция һөҙөмтәләре буйынса ҡаҙнаға 4 миллион һумдан ашыу штраф түләтеү һәм 33 мигрантты республиканан ситкә сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителгән.

✓Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы эксперттары баһалауынса, Ер йөҙөндә ВИЧ-инфекция йөрөтөүселәрҙең һаны 46 миллиондан ашыу. Рәсәйҙә улар - 590 мең самаһы. 2011 йылдың 20 майына лаборатор тикшереүҙәр арҙамында беҙҙең республикала 11332 кешелә ошо вирус табылған, 8756 кеше иҫәптә тора, уларҙың 84 проценты 21-40 йәштәргәге эшкә һәләтле граждандар тәшкил итә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МАШИНАЛЫЛАРҘЫҢ...

## сығымы арта

**Хөкүмәт страховка хаҡын иҫәпләү буйынса яңы коэффициенттарҙы раҫланы. Тариф бөтә автомобилистар өсөн дә берҙәм һәм үҙгәрешһеҙ ҡалды - 1980 һум, ләкин полистың иң ахырғы хаҡы водителдең йәшенә һәм стажына, автомобилдең ҡеүәтенә, йәшәгән төбәгенә бәйле.**

Былар бөтәһе лә агент страховкалаясаҡ махсус коэффициенттарҙа сағыласаҡ. Бына шуларҙы арттырыу иҫәбенә лә автогражданка бөтөн Рәсәй буйынса ҡиммәтләнәсәк тә инде. 50-100 ат көсө ҡеүәтле автомобилдәр өсөн коэффициент 0,1-гә, йәғни 198 һумға арттырылған. Бынан тыш, 177 ҡалала һәм 62 төбәктә автомобилистарға хәҙер күберәк түләргә тура киләсәк. Мәҫәлән, страховка хаҡы буйынса Якутск, Силәбе, Пермь һәм Ҡаҙан ҡалалары Мәскәүгә тиңләштерелгән. Баш ҡаланың үҙәгенә һәм Санкт-Петербургҡа был юлы ҡағылмағандар, унда былай ҙа икеләтә коэффициент. 116 ҡала һәм 10 төбәк өсөн дә коэффициенттар үҙгәрешһеҙ ҡалдырылған. Был үҙгәрештәр төбәктәр буйынса автостраховкалаусылар килеме кимәленә тәҙәтмәләр индереү кәрәклегенән сығып эшләнгән. Йәнәһе лә, ҡайһы бер ҡалаларҙағы страховка компаниялары ОСАГО эрҙамында аҡса эшләмәй. Әйткәндәй, закон тарифты йылына бер тапҡырҙан да йышырап күтәрергә ҡушмай.



**ШУЛАЙ ИТЕП:**

**➔ 3 йылға тиклемге стажы булған 22 йәшкә тиклемге водителгә ҡарата ҡулланылған коэффицент - 1,8 (элеккеһе 1,7 ине).**

**➔ 3 йылға тиклемге стажы булған 22 йәштән өлкән водителгә ҡарата ҡулланылған коэффицент -1,7, (элеккеһе 1,5 ине).**

**➔ 3 йылдан артыҡ стажы булған 22 йәштән кесе водителгә ҡарата ҡулланылған коэффицент - 1,6 (элеккеһе 1,3 ине).**

**➔ Иҫәпһеҙ күп водителдәргә полис йүнәткәндә ҡулланылған коэффицент -1,8 (элеккеһе 1,7 ине).**

# АҘАҠҠА ҠАЛДЫРҺАҢ...

## икеләтә штраф түләйһең

**Рәсәй халҡы ял иткән осорҙа Дәүләт Думаһы депутаттары бер нисә закон ҡабул итергә өлгөрҙө. Юл йөрөгәндә ниндәйҙер ҡағиҙә боҙоу һөҙөмтәһендә һалынған штрафты түләргә онотоусы автомобилселәргә хәҙер был сумманы бер нисә тапҡыр арттырып түләргә тура килеүе ихтимал.**

Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа индерелгән төҙәтеүҙәргә ярашлы, 1 августан штраф түләмәгән өсөн санкциялар ҡатыланды. Законға ярашлы, административ штрафтар ҡарар ҡабул ителгәндән алып 1 ай эсендә түләнергә тейеш. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәһен боҙған өсөн водитель 1 ай эсендә штраф түләп өлгөрөргә бурыслы. Был ваҡыт эсендә өлгөрмәйһең икән - төүге штрафыңа өҫтәп, тағы бер штраф түләргә тейеш булып сығаһың. Уның суммаһы - төүге штрафтың ике күләме. Мәҫәлән, машина тәҙрәләрен ҡараңғылатҡан өсөн 500 һәм хәтер насар булған өсөн тағы ла 1 мең һум. Яңы закон буйынса, штрафтарҙы иҫәпләп сығарыу формулаһы элеккесә ҡалған. Тәжрибә күрһәтеүенсә, водителдәр ҙур күләмдәге штрафтарҙы ваҡытында түләй, әммә ваҡыраҡ гәйептәр өсөн һалынған штрафтар йыш ҡына түләнмәй ҡала. Рәсәйҙең ЮХХДИ мәғлүмәттәре буйынса, 2011 йылда һалынған штрафтарҙың 70 проценты ғына түләнгән.

Граждандарҙың ваҡ штрафтарға иғтибарын көсәйтеү маҡсатынан закон сығарыусылар был штраф күләменең минималь суммаһын да билдәләне. Ул 1 мең һум тәшкил итә. Йәғни, 100 һум штраф өсөн бер айҙан һуң 300 һум түгел, ә 1100 һум түләргә тура киләсәк. Етмәһә, ҡабаттан штраф һалынғандан һуң да һеҙ уны түләргә онотаһығыҙ икән, закон буйынса мәғлүмәт суд приставтары хеҙмәтенә биреләсәк. Шулай уҡ штраф түләнгәндән һуң квитанцияларҙың күсермәһен тейешле ведомствоға ебәреү кәрәк буласаҡ, сөнки яңы законға ярашлы, штраф һалған ойошма 30 көн эсендә уны түләү тураһында документ алмаһа, ул шулай уҡ эште суд приставтарына йөкмәтеү хоҡуғына эйә. Әгәр ҙә штраф һеҙгә яңылыш һалынған йәки уны һеҙгә бәйле булмаған сәбәптәр арҡаһында түләй алмайһығыҙ икән, ҡабаттан һалынған штраф тураһындағы ҡарарға ул үҙ көсөнә ингән көндән 10 көн эсендә ялыу бирә алаһығыҙ.

ҮӘТ ӘЙ!



# БЫНДАЙ ИЛ ЮҠ,

## паспортыңды алыштыр!

**Рәсәй Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөн республикала 804 граждан СССР паспорты менән йөрөй. Шәхес таныҡлығын алмаштырмауҙың сәбәптәре төрлө. Берәүҙәр уны дингә бәйләһә, кемдер паспортта өс алтынан торған һан комбинацияһын үҙ итә, бәғзеләр "шәхси код" графаһын ҡабул итә алмай. Кемдер яңы паспорт алыуҙа тоткарланыуын финанс сығымдарына бәйләй. Әммә бөгөн был төп сәбәп була алмай, сөнки түләүҙәр барлыҡ социаль ҡатламдар ҙа иҫәпләшә алырлыҡ күләмдә билдәләнгән.**

Ҡайһы бер өлкән йәштәге граждандар территориаль бүлексәгә килеп паспорт алыштыра алмауын да сәбәп итә. Бындай осраҡтарҙа граждандарҙың йәки уларҙың туғандарының (законлы вәкилдәре) һорауы буйынса миграция хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре адрес буйынса үҙҙәре килеп, документтар ҡабул итә һәм яңы паспорт тапшыра ала.

Ни өсөн СССР паспортын Рәсәй Федерацияһы гражданы паспортының яңы өлгөһөнә алыштырыу кәрәк һуң? Беренсенән, СССР заманындағы шәхес таныҡлығы менән йөрөүсе граждандар, Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексының 19.15 статьяһының 1-се бүлегендә ҡаралғанса, автоматик рәүештә закон боҙоусы тип иҫәпләнә. Ошо статьяға ярашлы, ғәмәлдә булмаған шәхес таныҡлығы менән йәшәүсе гражданға 15-25 минималь эш хаҡы күләмендә штраф һалыу ҡаралған. Шәхси торлағында иҫке паспорт менән йәшәүселәргә лә ошо статьяның 2-се бүлеге буйынса шундай уҡ күләмдәге штраф янай.

Икенсенән, әһәмиәтле юридик эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыу өсөн унда ҡатнашыусыларҙың гражданлығын асыҡларға кәрәк. 1974 йылғы өлгөләге паспорт хужаһының граждандарлығы тураһында мәғлүмәт һаҡланмай. Шуға күрә, өҫтәмә рәүештә кешенең Рәсәй гражданымы, түгелме икәнлеген асыҡлау талап ителә. Йәғни, яңы паспорт Рәсәй граждандарына Төп Законда нығытылған законлы хоҡуҡтарын һәм ихтыяждарын ваҡытында һәм сифатлы итеп тормошҡа ашырырға ярҙам итә.

Үрҙә атап үткән проблемалар килеп тыумаһын өсөн, Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре СССР паспортын Рәсәй гражданы паспортына алмаштырырға саҡыра. Бының өсөн йәшәгән урын буйынса миграция хеҙмәтенең территориаль бүлексәһенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Быйыл июлдән башлап машина уҡый алған яҙыулы яңы өлгөләге паспорттар тапшырыла башланы. Был яңылыҡ ялған документ эшләүҙән һаҡлай һәм төп документтағы мәғлүмәтте иҫәпләү һәм эшкәртеү ваҡытын күпкә ҡыҫҡарта.

**Ғәлиә ХӘБИӘХМӘТОВА,**
**Рәсәй Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы хеҙмәткәре.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Анар һуты



Йөрәк ауыртыбыраҡ торғанда ла, былай ғына ла 2 анар (гранат) һутына 1 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо (пустырник) төнәтмәһе ҡушып, әҙерәк һыу өҫтәп, көнөнә ярты стакан эсегеҙ. Башығыҙ бер нисә көн ауыртып яфалаһа, күрәгә, ҡара емеш һәм башҡа емештәр ашағыҙ. Аминокислоталарға бай, составында Е, В витаминдары булған миндаль сәтләүеген дә ҡушып ашап ебәрһәгеҙ, баш ауыртыуы бөтөп, күреү һәләте яҡшырып китер.

### Ҡабаҡ

Ҡабаҡ цинкка бай, уны ашаһаң, хәтер яҡшыра, йоҡоһоҙлоҡ булмай, тынысландырыу һәләтенә лә эйә. Ҡабаҡ бигерәк тә ир-аттарға файҙалы.

Эрозиялы гастрит ваҡытында ҡабаҡ һутына бал ҡушып эсергә. Был сирҙән тағы бер дауа: 4 өлөш борсаҡҡа 4 өлөш кукуруз емеше ҡушып, талғын ғына ҡайнатып, ҡайнатмаһын эсергә. Һимеҙлеккә ҡаршы һөт менән быҡтырылған ҡабаҡ яҡшы. Шулай уҡ әнис (укроп), ҡатыҡ, һарымһаҡ, әфлисунды блендерҙа болғатып, һөткә һалып эсергә була. Әфлисун урынына лимон да ярай. Һөҙмә эшләргә гәҙәтләнегеҙ, ул да ябығыу өсөн яҡшы сара. Был осраҡта магазиндан йогурт һатып алырға ла кәрәкмәйәсәк.

### Ангина

Берәй уңайлы таяҡҡа мамыҡ урап, уны аҡ шыршы (пихта) майына манып, еңелсә һығырға ла, тамаҡ биҙҙәрен майларға. Быны 2-3 көн буйы 3-4 тапҡыр эшләргә. Хроник ангина булғанда, өҫтәп, танау тишектәренә лә 1-2 тамсы аҡ шыршы майы тамыҙып торорғоҙ.

Был май теш һыҙлағанда ла ярҙамға килер. Мамыҡ киҫәгән уға мансып, һыҙлаған теш ҡаҙнаһына тышҡы яҡтан 5-7 минут, унан һуң эске яғынан шул уҡ ваҡыт торорға. Әгәр ҙә теш тишелгән икән, мамыҡты шул урынға ҡуйырға. Былар теш табибына бара алмаған ваҡытта ҡулланыла. Шулай ҙа теш табибына барыуҙы һуҙырға ярамай.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Хәлем бөттө, йығылам, тигәндә, әлдә ҡанымдағы быуаттар төпкөлөнән урғылған ата-бабаларҙың көслө яугир рухы ҡалҡып сыға ла, таштай нығып, тағы алға ынтылдым.*

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...



## ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТТӘР

**Был нәсихәттәр - йәш килендәргә һәм килен булып төшәсәк ҡыҙҙарға өлгө бирерҙәй бик фәһемле һәм дә ғибрәтле мәғәнәүи дини риүәйәт. Рухи донъябыҙҙы фиғеле яҡты бер нур булып биҙәр был ҡыҙҙың атаһы бөтөн кешеләрҙе үҙенең әмерендә тотҡан ырыу башлығы, мәшһүр хөкүмәт етәксеһе була. Әсәһе иһә бик аҡыллы, тормошто яҡшы белгән мөслимә - динле әсә. Атаҡлы етәксе ҡатыны, ир уҙаманы ҡатыны, тәрбиәле бер ғаиләнән килгән зирәк, иманлы әсә! Дан-дәрәжә, байлыҡ, ғилем-мәғрифәт, дәүләт идараһы - шул ғаиләнең Хаҡ Тәғәлә бүләк иткән ырыҫы. Ана шундай ғаиләлә күҙ өҫтөндә ҡаш ҡына булып үҫкән ҡыҙ балаға әсәһе тарафынан бирелгән 10 нәсихәт бөгөн дә беҙҙең күңелдәребеҙҙе сафландырыр, зөфаф кисәләренән алып ғүмерҙәрҙең ахырынаса юл яҡтыртып барырҙай, затлынан да затлы бирнәләргә торошло нәсихәт ул.**
**Бәйән ҡылыу - беҙҙән, уҡып ғибрәт алыу - һеҙҙән, тәьҫир-йоғонтоһо - Йәнәбе Хаҡтандыр.**

Хәҙистәрҙән күренеүенсә, Харистың ҡыҙы Әсмә, килен булып төшөр көндә, әсәһе Өммиә тарафынан ошондай шәкелдә өгөт-нәсихәттәр ала.

"Балам, һөйөклө ҡыҙым, һәр кеше өгөт-нәсихәткә мохтаж. Нәсихәт тыңлап, уны тотҡандар донъяла һөйөнөстәр, ҡыуаныстар эсендә һәм дә бәхетле ғүмер кисерер.

Алланың тәғәйенләгән ҡанундарына күрә, тормош сәхнәһенә баҫыу ваҡыты еткән һәр бер ҡатын - иргә, һәр ир - ҡатынға мохтаж. Улар уртаҡ бер ғаилә ояһы ҡororға мохтаж бер сифатта яралтылған. Был - Аллаһ ҡануны. Был ҡанунды һис бер кеше боҙа алмаҫ, һәм был ҡиәмәткә ҡәҙәр шулай буласаҡ.

Шул сәбәптән, һин дә, балам, тәпәй баҫҡан, йүгереп-уйнап үҫкән йортондан бығa ҡәҙәр белмәгән бер тормош арҡалашыңдың өйөнә, һинеке буласаҡ бер өйгә китәсәкһең.

Әй минең йөрәк майым, бер бөртөк ҡыҙым, күҙемдең нуры - балам! Хәҙер һиңә әйтәм - һин ул затҡа (ireңә) хеҙмәтсе бул, ул да һиңә тоғро, ышаныслы булһын. Һин уға ер бул, ул һиңә күк булһын. Һин ireңә өй бул, ул һиңә терәк булһын.

Һөйөклө ҡыҙым! Хәҙер ҡайһы бер кәңәштәр бирермен, уларҙы күңеленә бикләлә, кәрәклеге еткәс, еренә еткереп башҡар.

Был әйткәндәремде үтәһәң, ireң менән гүзәл бер шәкелдә шатлыҡ менән тулы ғүмер кисерерһегеҙ, бәхетле һәм бәхтиәр булырһығыҙ. Беҙ ҙә (һәр ике яҡтың атаәсәһе) хозур-рәхәт эсендә һеҙҙең менән бәхетле булырбыҙ. Өгөттәремә ҡолаҡ һалмай, үҙ көйөңә йөрөһәң, һәр ике ғаилә лә хозурһыҙ булыр. Һин дә йәһәннәм тормошонда йәшәрһең.

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**
**(Дауамы бар).**

ЯҘМЫШМЫ, ЯҢЫЛЫШМЫ?

# ИҢ АУЫР САКТАРҘА...

## башҡорт ҡаны ярҙам итте

**Бөрйән районының балалар йортонан Өфөгә алып килгәс, бик ауырыу балаларҙы дауаханаға һалдылар. Әкренләп һауыға барған балалар берәм-берәм балалар йортона ҡайта торҙо. Бына мин дә һауығып ҡайттым. Тик тәүҙә бер-ике көн изоляторҙа ятырға кәрәк ине.**



Тәрбиәсе апайҙар ҡайтып киткәс, балалар изоляторҙың ишеген асып, "яңы" баланы ҡарарға килделәр. Минең бик бәләкәй, бик тә ябыҡ булыуымды күргәс, улар иҙәнгә одеял йәйеп, мине төрөп, күтәреп уйнанылар. Уларға күңелле булды. Икенсе көн шәфҡәт туташы Рита апай мине етәкләп төркөмгә алып китте. Зал аша үткәндә, бүлмә мөйөшөндә, бер бөҙрә сәсле малай үҙ-үҙе менән туп тәгәрәтеп уйнап ултыра ине. Ул йылмайып: "Фәүзиәне беҙгә алып киләләр",- тине. Минең исемемде ҡайҙан белә икән, тип аптыраным тәүҙә, шунан кисә изоляторға килгән балалар әйткәндер, тигән һығымта яһаным. Төркөмгә инһәк, бына ҡыҙыҡ, бөтә балалар ҙа минең кеүек тап-таҡыр башлы, тик бер генә ҡара бөҙрә сәсле Васёк, тубын тотоп, беҙҙең арттан килеп керҙе (уның матур сәсен киҫергә бер кемдең дә ҡулы күтәрелмәгәндер, ахыры, тип уйланым мин). Уның ҡыҙмы был, малаймы икәнен күлдәгенә ҡарап ҡына белеп була ине.

Бына хәҙер мин дә детдом балаһы. Уның яҙылмаған ҡағиҙәләренә күнегә башланым. Ашарға ултырғас, һәр бала тиҙ генә иң ҙур икмәк киҫәген эләктереп алырға ашыға. Иң тулы стаканды, хатта ҡалаҡтарҙы ла талашып тигәндәй алалар. Коридорҙа ла һуғышалар, йоҡо бүлмәһендә лә һуғышалар. Илай-илай күнегәм. Ниңәлер урамға йөрөргә сыҡҡанда ғына һуғышмайҙар. Беҙҙе бер малай, бер ҡыҙ ҡулға-ҡул тотоштороп теҙәләр ҙә, йә "Салауат баҡсаһы"на, йә "Матросов баҡсаһы"на алып киләләр, йә былай ғына ҡала ҡарап йөрөйбөҙ. Иң алда Әнүзә менән Риф, аҙаҡ Ғилминур менән Павлик, аҙаҡ - Васёк менән мин. Беҙҙең арттан кем кем менән тотоношоп атлағандыр, онотҡанмын. Васёк минең ҡулымды ныҡ тота, үҙе: "Фәүзиә, мин әле генә бала ул, ә элек оло кеше инем", - ти. Ҡала буйлап йөрөгәндә Васёктың атҡа атланып, үткер ҡылыс тотоп, дошмандарға ҡаршы Чапаев отрядында көрәшкән саҡтарын тыңлап йөрөнөм. Уның батырлыҡтарына һоҡланып, уның серен бер кемгә лә һөйләмәҫкә ант иттем. Ул мине: "Һин ҡайғырма, Фәүзиә, мин бит тағы ла үҫермен, ҙур булырмын. Минең ап-аҡ атым да, үткер ҡылысым да булыр, илемде дошмандарҙан һаҡлармын", - тип йыуата ине. Шулай ысын күңелдән Васёк менән һоҡланып, хатта йоҡларға ятҡанда ла уға киләсәктә дошмандарҙы еңергә ярҙам итер өсөн төрлө хәйләләр ҡороп, йоҡоға тала инем. Ҡайһы саҡ урамдан ҡайтҡанда ҡараңғы төшә башлап, урамдарҙа ҡала уттары янһа, мин күҙҙәремде сытырлатып йомам, үҙем, йығылам, тип бөтөнләй ҡурҡмайым, сөнки мине бит Васёк етәкләп бара. Ә ҡаланың уттары, оҙон нурҙарын һуҙып, бер рәткә теҙелешеп атлай. Иң алда Васёк ап-аҡ атында, аҙаҡ мин һәм ҡала уттары, уттар ҙа беҙҙең яугирҙар. Оҙон нурҙары - уларҙың ҡылыстары. "Бер, ике! Бер, ике! Алға! Еңеүгә!", - тип ҡабатлайым мин эстән генә. Ҡайһы ваҡыт беҙҙең һәр бер аҙымды ныҡ баҫып атлауыбыҙға бөтә балалар ҙа ҡушыла. Үтеп барыусы кешеләр йылмая: "Кескәй генә яугирҙар", - тип әйтеп үтә улар (беҙҙең өҫтөбөҙҙәге пальтолар ҙа шинель туҡымаһынан тегелгән бит).

Һиҙелмәй генә ике-өс йыл үтеп тә китте. Беҙҙе мәктәпкә оҙатыр алдынан теҙҙеләр, һайланылар, һананылар, бүлделәр. Бәхетлеләрҙе, һуғыштан еңеп ҡайтҡан атайҙары эҙләп килеп табып, юғарыға сөйөп күтәреп алып ҡайтып киттеләр. Мәрйәм - Мария, Барый - Борис, Шәүрә Шура булып сыҡты. Береһе - белорус, береһе - рус, береһе украин балаһы икән, тик әле улар башҡортса һөйләшәләр. Беҙ мәктәп балалары йортона күстек, башҡорт мәктәбенә уҡырға индек, Ә Павлик менән Васёк рус мәктәбенә китте.

Тәүҙә аҡ алъяпҡысҡа, матур китаптарға һоҡланып, аҙаҡ ҡыҙыл галстукка, комсомолға, шиғырҙарға, хыялдарға күмелеп, гел юғарыға, гел алға ынтылдым. Донъя сәнғәтен өйрәнеп, үҙемде онотоп, гүзәлеккә сумып тигәндәй ғүмер үтте. Әлбиттә, ағастар ҙа ултырттым, баламды ла үҫтерҙем, ейәндәремде лә күтәрештем. Бына инде хаҡлы ялға туҡтаным. Ярты быуаттан артыҡ ғүмер йүгерҙем дә йүгерҙем. Үткән ғүмер юлына әйләнеп ҡарарға ла ваҡыт тапманым. Арыным, талдым, ялға туҡтаным. Тынлыҡ... Шул тынлыҡтың эсенән, хәтеремдең иң төпкөлөнән, ап-аҡ атҡа атланып, һәйкәл кеүек балҡып килеп сыҡты ул Васёк. "Васёк! Ҡайҙа һин, Васёк?" Зәңгәр күҙле, ҡара бөҙрә сәсле Васёк, мин һине онотманым. Ниндәй ышаныслы ине һинең ҡулдарың, ниндәй һоҡландырғыс ине һинең йөҙөң, ниндәй гүзәл ине һинең күңелең. Мәктәпте уҡып бөткәс, бәләкәй генә сумаҙан тотоп, таныш булмаған ҙур донъя алдына сығып, бер үҙем генә ҡаушап баҫып торғанда, аҙаҡ йәш бала күтәреп яңғыҙ ҡалғанда, көнсөлдәр, хәйләкәр дошмандар күбәйеп, уларға ҡаршы торғанда, Васёк, һинең ышаныслы, тоғро ҡулдарың булманы минең янымда. Хәлем бөттө, йығылам, тигәндә, әлдә ҡанымдағы быуаттар төпкөлөнән урғылған ата-бабаларҙың көслө яугир рухы ҡалҡып сыға ла, таштай нығып, тағы алға ынтылдым. Ҡурай моңо мине әллә нисә быуаттар аша, йәйләүҙәргә алып китә лә, тирмәләр ҡоролған, усаҡтар яғылған йылдарҙан ҡайтып китә алмай аптырай инем бит. Эйе, бала саҡта ла ҡурай моңон ишетһәм, бутала инем. Миңә нисә йәш? Әллә ун йәшме? Әллә йөҙ йәшме? Боронғоларҙың хистәре күңелемә моң аша тула ла, ауыр ҙа, рәхәт тә. Арыйым да, рухланып, һоҡланам да. Минең дә шулай, Васектыҡы һымаҡ, теге ғүмеремдәге оло саҡтарым иҫемә төшкәндер ҙә, тик аңлай ғына алмағанмынмы?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был иҫтәлегемде 15 йыл элек, пенсияға сығыуымдың беренсе көнөндә яҙғайным. Ниңәлер "Яҙмышмы, яңылышмы?" рубрикаһына һалырға булдым. Тормош юлыңа байҡау яһаһаң, бала саҡтағы саф дуҫлыҡтан да һоҡланырлығы юҡтыр, тип тә ҡуяһың. Ниңә ул малай һине йоҙроҡтарҙан ҡурсалаған, иң матур уйынсыҡтарын һиңә тотторған, иң йәшерен серҙәре менән уртаҡлашҡан? Нәҡ беҙ кескәй саҡта экрандарға "Чапаев" кинофильмы сыҡҡайны бит. Ул фильм күп малайҙарҙың күңелен үҫтергәндер, шуға ла мине ул малай нескә күңелле саҡтағы етемлек хистәренән ҡурсалаған. Аҙаҡ ғүмерем юлын йәлләүсеһеҙ, ҡурсалаусыһыҙ үтһәм дә, башҡорт булыуым ярҙам итте, тигән фекерҙе яҙҙым был иҫтәлегемә.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*✓ Сит илдең йолалары ла ят, ситен. Уны ҡабул итеү мөмкин түгел, ә яраҡлашырға ғына кәрәк. Ә кемдеңдер ихтыярына яраҡлашыу - үҙең булыуҙан туҡтау, үҙең булып үҙеңсә йәшәмәү - ул ҡоллоҡ, рухи ҡоллоҡ тигән һүҙ.*



*ЗАМАНАЛАР БУЛҒАН ЭЛГӘРЕ...*

**Ислам дине йолаларын тайпылышһыҙ үтәгән атай-олатайҙарыбыҙ йәйләүҙәрҙә асыҡ һауала таштан йәйге мәсет ҡорор булған. Яңыраҡ беҙ Хәйбулла районының Һаҡмар йылғаһы буйында матур бер урында шундай таш мәсеткә юлыҡтыҡ. Был урынды беҙгә районның Йәнтеш ауылы ир-уҙамандары Абдулхаҡ Ҡаҙаев менән Юныс Иштанов күрһәтте. Совет осоронда был туғай һөрөлөп сәселгән булған. Тракторсылар һәр ваҡыт был изге урынды уратып үткән. Йәнтештәр әйтеүенсә, ергә батырылып (иғтибар итегеҙ, эре-эре таштар ер өҫтөнә теҙеп кенә һалынмаған, ә батырылған һәм тәбиғи үҫкән таш рәүешен алған!) уратып һалынған таштар элегерәк бик күп булған, тик өй һалыусылар уларҙың күбеһен нигеҙ ташы итеп алып бөткән. Шуға күрә лә таш мәсеттең михрабы танылыр-танымаҫлыҡ хәлгә килгән. Мәсеткә алыҫ түгел урында боронғо зыяраттың булыуы ла күпкә ишара.**

# БИКБАУ БЕЙҘЕҢ ТАШ МӘСЕТЕ...

## килеп аҙан әйтеүсеһен, ауылын тергеҙеүсеһен көтә



### Тарихи белешмә

Үҫәргәндәрҙең данлыҡлы кенәзе Бикбау бей нигеҙ һалған Бикбау ауылының йәйләү ерендә һалынған был таш мәсет. Ауылдан был урынға килер өсөн Һаҡмар йылғаһы аша ике кисеү үтергә кәрәк. Был төбәктең тарихын яҡшы белеүсе крайҙы өйрәнеүсе журналист Рәшит Насировтың 2009 йылда донъя күргән "Ибраһим - оло яҙмышлы ауылым" тигән китабында килтерелгән мәғлүмәттәр буйынса, 1557 йылда бөрйәндәрҙең Иҫкебейе (Иҫәкәй), ҡыпсаҡтарҙың Мишәүле Ҡарағужаҡ бейе, тамъяндарҙың Шәғәле Шаҡман бейе менән берлектә Аҡ батшаға барып жалованный грамота алыусы Бикбау Йәнәкәй бик затлы нәҫелдән булған. Үҫәргәндәрҙең Аҫҡаҡтар (Аҡһаҡ) араһы шәжәрәһе түбәндәгесә: Баба Төкләҫ - Тырма батыр - Ҡаҙансы батыр - Ишлеғая - Ҡарағая - Ҡотлоғая - Туҡһаба бей - Мөйтән бей - Үҫәргән бей (уның ике улы: Болаҡ һәм Таймаҫ бей). Таймаҫ бейҙең 7 улы булған: Шишәй, Бишәй, Аҫҡаҡ (Аҡһаҡ), Сураш, Абаҙы (Апанды), Ҡунаҡ (Бүре), Ҡыҙрас (барыһы ла бейҙәр). Артабан Аҫҡаҡтан Һарыбаш, Һарыбаштан Тәүәкәй, Тәүәкәйҙән Йәнәкәй, Йәнәкәйҙән Бикбау бей тыуған. Бикбау бейҙең 4 ҡатыны булған. Тәүге ҡатыны Байбикәнән Бикташ, Иҫәнбирҙе, икенсе ҡатынынан (исеме билдәһеҙ) Бикбирҙе, Ҡолбирҙе, Бикҡужа, Ҡырһан, Илтәс, Билал, өсөнсө ҡатынынан (исеме билдәһеҙ) Этбай, Илтенбай, Байгилде, Олтораҡ, дүртенсе ҡатыны Аҡһылыуҙан (уның атаһы үҫәргәндәрҙең сәсәне була) Аҡҡужа, Бикҡужа, Танһыҡҡужа атлы улдары тыуа. 15 ир-азаматҡа ғүмер биреүсе данлыҡлы Бикбау бей тарханлыҡ дәрәжәһен алғас, бер улының исеме менән аталған Аҡҡужа (хәҙерге Ейәнсура районында, ауылдың икенсе исеме Бикбау) ауылына күсә һәм ғүмеренең аҙағынаса шул ауылда йәшәй. 2007 йылда Рәсәй менән Башҡортостан берлегенең 450 йыллығы айҡанлы Аҡҡужа ауылында Бикбау бейгә һәйкәл ҡуйылды. Хәйбулла районындағы Бикбау ауылы, үкенескә ҡаршы, үткән быуаттың 50-се йылдарында перспективаһыҙ ауыл мөһөрө һуғылып, юҡҡа сығыуға дусар ителгән. Бикбау кешеләре хәҙерге ваҡытта, асылда, районның Ивановка ауылында йәшәй. Тарихтан билдәле булыуынса, Һаҡмар йылғаһы буйындағы был данлыҡлы ауыл 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалынан һәм 1773 - 1775 йылдарҙағы милли-азатлыҡ күтәрелешенән һуң ике тапҡыр яндырыла һәм киренән аяҡҡа баҫтырыла. Тик бына "перспективаһыҙ" мөһөрө ауылды бөтөнләй аяҡтан йыға. Шулай ҙа Бикбау үҙенең аяҡҡа баҫтырыусы әйәләрен, бей рухының балҡыуын көтә барыбер. Һәр хәлдә, шуға өмөт итәйек.

### Таш мәсет нимәгә?

Таш мәсеттәрҙе өйрәнеүҙә ҙур фиҙаҡәрлек күрһәткән Халыҡ-ара, Рәсәй һәм Башҡортостан журналистар союздары ағзаһы, "Аманат" журналының баш мөхәррире Сәлмән Ярмуллин үҙенең "Ахыр заман - аяҡ аҫтында" ("Китап", Өфө-2004) тигән китабына ингән "Халҡым ҡорған таш мәсеттәр" тигән мәҡәләһендә йәйләүҙәге таш мәсеттәр проблемаһын тарихи юҫыҡта ентекле өйрәнеп, уларҙы төҙөү маҡсатын түбәндәгесә билдәләй:

"...Тулыһынса мосолманлашҡас, башҡорттарҙа йәйләүҙә саҡта ла намаҙ уҡыу зарурлығы тыуа. Башҡа намаҙҙарҙы яңғыҙың тирмәлә лә уҡырға мөмкин, ә бына йома намаҙҙарын бит күмәкләп уҡырға кәрәк. Ғибәҙәт ҡылыр өсөн генә генә ауылға ҡайтып йөрөп тә булмай. Ана шул ваҡытта башҡорттар ҡырҙа, йәйләү урындарында, Мөхәммәт бәйғәмбәр төҙөткән тәүге мәсеттәргә оҡшатып, таштан мәсеттәр ҡора. Мәмбәт ауылының (Хәйбулла районы) ғүмер буйы шунда йәшәгән ҡарттары, икеһе лә ауылға нигеҙ һалыусы Мәмбәт Һабыр улының нәҫеленән булған 1912 йылғы Усман Мортаза улы менән ауылдың имамы 1931 йылғы Ҡасим Таһир улы Мәмбәтовтар ана шундай таш мәсеттәрҙе алып барып күрһәтте. Мәмбәт ауылынан 5-6 саҡырым төньяҡтараҡ ята улар. Әйтеүҙәренсә, был тирәлә улар 5-6 мәсет икән, әммә беҙгә 3-әүһен генә күрергә насип булды. Өсөһө лә дала өҫтөндә ҡалҡыңҡырап торған уба башында.

Таш мәсеттәр тигәс тә, уларҙың бер ниндәй ҙә бинаһы юҡ: инеп йөрөрлөк ишек ҡалдырып, эреле-ваҡлы таштар менән түңәрәк формаһында уратып алынған билдәле бер территориянан ғибәрәт, ҡибла яғында имам-хатиб өсөн михрабы ла бар. Был ғибәҙәт ҡылыу ҡоролмаларының бөтәһененең дә диаметры яҡынса 4-5 метр, әйләнәһе 12-15 метр. Уларҙың эсенә сәждәгә киткәндә лә 15-20 кеше һыя. Ана шуларҙы урындағы халыҡ таш мәсеттәр тип атай...

...Усман олатай Мәмбәтов бәләкәй сағында, революциянан алда ауыл халҡы менән һуңғы тапҡыр ошо тирәгә йәйләүгә сыҡҡанын хәтерләй: "Шунан һуң донъялар буталып китте, мәмбәттәр бүтән йәйләүгә сыҡманы, - ти ул. - Һуңғарыраҡ та, үткән-һүткәндә ошонда туҡтап, намаҙ уҡып китеүселәрҙе күрергә тура килгеләне. Был мәсеттәр бик боронғо булырға тейеш, сөнки мин бала саҡта ла ҡарттарҙың уларҙы ҡасан төҙөүҙәре тураһында һөйләгәндәрен ишетмәнем. Ғөмүмән, уларҙың йәшен берәү ҙә белмәй..."

Йәнтеш ауылы ир-уҙамандары Абдулхаҡ Ҡаҙаев менән Юныс Иштанов та таш мәсеттәрҙең ҡасан һалыныуы хаҡында бер ни әйтә алманы. Улай ғына ла түгел, түңәрәкләп ергә батырылған был таштарҙың Бикбау ауылынең йәйләү мәсете булыуын тәүге тапҡыр фаразлап әйтеүселәр ҙә улар. Ҡоролманың таш мәсет икәнлегенә һәм Бикбау ауылына ҡарағанлығына шик юҡ, кем белә, бәлки үҫәргәндәрҙең атаҡлы кенәзе Бикбау бей үҙе лә йәйләүгә сыҡҡанында, шулай уҡ Аҡ батшаға юллаunion алдына ошо Аллаһ йортона инеп намаҙ уҡығандыр.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Сәлмән Ярмуллин Башҡорт дәүләт ҡурсаулығында ла Тамъян ырыуы башҡорттарының йәйләү урынында шундай уҡ таш мәсетте табыуҙа һәм уны тергеҙеүҙә ҡатнашыуы хаҡында белдерҙе. Бөгөн ул мәсетте Әбйәлил районы мосолмандары ҡәҙерләп тота. Тамъян ырыуы, тигәндән, ошо ырыуҙың бейе Шағәле Шаҡман менән замандаш булған, Аҡ батшаға бергәләшеп барған бит үҫәргәндәрҙең бейе Бикбау Йәнәкәй. Бикбау бейҙе үҙҙәренең атаҡлы шәхесе тип һанаған Хәйбулла, Ейәнсура райондары үҫәргәндәре өсөн бына тигән өлгө был. Йәнтештәр бөгөн үк өҫтәп таш килтереп, таш мәсеткә реставрация яһарға әҙер булыуын белдереп, Аллаһ йортона инеп аҙан әйтте. Йөрәктәре уяуҙар, күңелдәре асыҡтар уларҙың тауышын ишеткәндер, моғайын. Кем белә, бәлки был тауышты ишетеүселәр данлыҡлы Бикбау ауылын да тергеҙер. Нимә генә тимә, был уникаль ҡомартҡы аяҡҡа баҫтырылып, махсус урында теркәлеп, иҫәпкә алынып, мотлаҡ рәүештә дәүләт яҡлауына алынырға тейештер. Башҡортостандың Рәсәй Федерацияһында үҙенең позицияһын нығытыуҙа ла бер сара булыр ине был аҙым.**

Әмир ҒҮМӘРОВ.

*АҠЫЛ ҺАНДЫҒЫ*

# УРАЛ БАТЫРҘЫҢ...

## халыҡҡа әйтеп ҡалдырғаны

**Башҡорт халыҡ ижадын бик иғтибар менән, тел төбөн, йәғни кинәйә менән әйткән фекерен төшөнөп уҡыһаң, иҫ китмәле аҡыл хазинаһына тап булаһың. Әммә халыҡ әйтер фекерен, бирәһе аҡылын, төшөндөрәһе һабағын "тегеләй эшләргә кәрәк, былай итергә кәрәк", тип кенә һеңдермәй кеше күңеленә, ә төрлө ысулдар, саралар табып еткерергә ынтыла.**

Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосында аҡыл-һабаҡ биреүҙең төрлө формаларын осратабыҙ. Әммә шуныһы үкенесле, лозунгыларға һәм туранан-тура әйтелгән күрһәтмәләргә күнегеп киткәнлектән, беҙ был бөйөк эпостың түбәндәге юлдарын - йәғни туранан-тура атап әйтелгәндәрен генә йәшәү ҡағиҙәһе итеп алабыҙ.

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ,*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*

*Олоно оло итегеҙ,*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ,*
*Кесене кесе итегеҙ,*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ.*
*Күҙенә сүп төшөрҙәй,*
*Күҙһеҙ булып ҡалырҙай*
*Еҫерҙәрҙең алдында*
*Күҙенә керпек булығыҙ.*

*Яуызға юлдаш булмағыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.*

Әлбиттә, иң гуманлы йәмғиәт төҙөп йәшәүгә ынтылған башҡорт халҡының тап ошо аманатты йәшәү ҡануны итеп алыуы һәм телдән-телгә таратып ебәреүе тик маҡтауға һәм хуплауға лайыҡ. Әммә бит эпос кинәйә менән әйтелгән ҡиммәтле фекерҙәргә иҫ китмәле бай. Мәҫәлән,

*Йәшәй торған илем бар,*
*Илһеҙ етем түгелмен,* - ти Урал батыр.

Тимәк, халҡыбыҙҙа етемлек төшөнсәһе атай-әсәйһеҙлекте генә күҙҙә тотмай. Ә илһеҙ ҡалыуҙы ла ул етемлеккә һанаған. Тимәк, илдән айырылмаҫҡа, ил ташлап китмәҫкә, тигән васыят ҡалдырған киләһе быуынға. Илдән ғүмерлеккә айырылыу башҡорт өсөн иң ауыр яза-етемлек булғанға, Салауат Юлаев менән атаһы һәм көрәштәштәре мәңгелеккә һөргөнгә оҙатыла ла инде.

*Ҡыҙым әйткәс, бармайынса*
*Нимә уйлап тораһың?*
*Ниңә йолам боҙаһың,*
*Бармай ваҡыт һуҙаһың?* - ти Ҡатил Уралға.

*Мин ят йола белмәйем,* - тип яуаплай Урал. Урал батыр хатта менеп килгән арыҫланына ла:

*Килмәһәм, оҙаҡ көтмәҫһең,*
*Ситтә ғүмер итмәҫһең.*
*Төҫәүелләп юлыңдан*
*Илгә ҡайтып китерһең,* - ти.

Тимәк, сит илдең йолалары ла ят, ситен. Уны ҡабул итеү мөмкин түгел, ә яраҡлашырға ғына кәрәк. Яраҡлаша алмайһың икән, баш тартаһың, һинән дә баш тартасаҡтар. Ә кемгәлер, кемдеңдер ихтыярына яраҡлашыу - уның күләгәһенә әйләнеү, үҙең булыуҙан туҡтау, үҙең булып үҙеңсә йәшәмәү - ул ҡоллоҡ, рухи ҡоллоҡ тигән һүҙ. **Әйтеп үтергә кәрәк, башҡорт халҡының бөтөн ихтилалдарының төп сәбәбе лә рухи ҡол булмауға ынтылыш. Ошо фекер Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол" пьесаһында ла әйтелгән, тик ни өсөндөр ошо төп фекергә иғтибар ителмәй. Ҡыраубикәнең, бәндәгә бәндә итмәһен, тигән һүҙҙәрен генә иҫкә төшөрөгөҙ...**

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.
(Дауамы бар).

***✓ Шашка фәлсәфәгә ҡоролған. Унда яңғыҙың ғына һәм бер фигураға ғына һөжүм итеп, бер нәмә лә ҡыйрата алмайһың. Шуға фигуралар фронт буйынса хәрәкәт иткәндә лә, берәү - бөтәһе өсөн, бөтәһе - берәү өсөн, тигән принципҡа буйһона.***

# ТОРМОШТА ЛА, аҡты ҡаранан айырыр

**(Башы 1-се биттә).**

## Шашка уйынында мәкер юҡ...

Күптәр шахматҡа өҫтөнлөк биреп, шашка уйынына балалар мауығыуы итеп ҡарай. Ә ныҡлап уйлаһаң, сатраш - ул сәйәсәт. Унда тормоштағы сәйәси алымдар сағылыш таба. Мәҫәлән, уйындың асылында күмәкләп бер фигураны урынынан бәреп төшөрөү йәки уға мат ҡуйыу, мәкер ята. Һәм ҡаршы яҡтың барлыҡ фигуралары бер фигураға һөжүм итә. Шул уҡ ваҡытта уйын бөтөн фронт буйынса бара, сөнки фигуралар шашкалағы кеүек бер-береһенән бойондороҡло түгел, ат йәки фил "дошман" тылына үтеп инеп, яңғыҙы ғына фигураларҙы ашап-ашап, кире үҙ яғына ҡайтыуы ихтимал.

Ә шашка фәлсәфәгә ҡоролған. Унда яңғыҙың ғына һәм бер фигураға ғына һөжүм итеп, бер нәмә лә ҡыйрата алмайһың. Шуға фигуралар фронт буйынса хәрәкәт иткәндә лә, берәү - бөтәһе өсөн, бөтәһе - берәү өсөн, тигән принципҡа буйһона. Юҡһа, бер фигураң саҡ ҡына яңғыҙ, ышаныслы тылһыҙ хәрәкәт итә башлаһын - шунда уҡ ҡаршы яҡ өсөн "аҙыҡ"ҡа әүерелә.

Шахмат партияһы, нигеҙҙә, уртаса 35 йөрөштән тора, шуның 20-һе - теория, йәғни быға тиклем билдәле композицияны үҙ эсенә ала, ҡалған 15 йөрөш кенә ижади ҡараш талап итә, ә шашка партияһында 15 йөрөш - теория, 35 йөрөш - аҡыл, уй, фекер, ижади ҡараш талап итә. Шуға башҡорт халҡы өсөн шашканы шахматҡа ҡарағанда яҡыныраҡ, уның фиғеленә, характерына, менталитетына тура килгән уйын, тип һанайым. Сөнки беҙҙең милләт өсөн мәкер хас түгел, ә уның һәр һүҙе, һәр уйы, һәр аҡылы үҙендә тәрән фәлсәфә һыйҙыра.

## Спорт - ҡатын-ҡыҙ шөғөлөмө?

Дөйөм алғанда, спорт, бигерәк тә футболды, хоккейҙы, ауыр атлетиканы алып ҡараһаң, ул ҡатын-ҡыҙ шөғөлө түгел. Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы - өйҙә ғаилә усағын һаҡлау, балалар тәрбиәләү, ирҙең эштән ҡайтыуын көтөү. Был идеаль вариантта шулай. Әммә яҙмышыңды спорттың ниндәй төрө менән булһа ла бәйләгәнһең икән, уларҙың барыһының да уртаҡ кире яғы бар - юлда күп йөрөргә кәрәк.

Шулай ҙа башҡа спорт төрҙәре менән сағыштырғанда шашка уйыны еңелерәк кеүек тойола, ләкин профессионал спортсылар өсөн шашка уйыны - ул эш, ул ижад. Физик күнегеүҙәргә нигеҙләнгән башҡа төрҙәрҙән айырмалы, бында уй, фекер менән эш итергә кәрәк. Йәғни башыңда һәр саҡ эҙләнеү бара. Башҡа һөнәр кешеләре иртән эшкә килеп, һигеҙ сәғәт эшләп ҡайта, шуның өсөн аҡса ала, ә беҙҙең эш хаҡы - ярыш һөҙөмтәләре. Ниндәй урын алыуыңа ҡарап, түләү күләме лә үҙгәрә. Ә спортта, мәғлүм булыуынса, еңеүсе ни бары өсәү генә. Шуға спортсыларҙың эше еңел, тигән ҡараш менән килешмәйем. Һәр эштә булған кеүек, бында ла үҙенсәлекле проблемалар ҙа, ҡыйынлыҡтар ҙа бар.

Әгәр уңышҡа өмөт итһәң, бар көсөңдө тик бер йүнәлешкә генә бирергә кәрәк. Төрлө яҡҡа бүлгеләнә башлаһаң, бер ерҙә лә яҡшы һөҙөмтә күрһәтмәүең ихтимал. Әммә тормошта ниндәй генә өлкәне алып ҡарама, ҡатын-ҡыҙға уңыш күберәк йылмайған кеүек. Сөнки беҙҙә ихтыяр көсө лә, яуаплылыҡ та күберәк.

## Маҡсатҡа өлгәшер өсөн идея кәрәк

Шашка кешенең логик фекерләүен үҫтерә, уйлау һәләтен аса. Мәҫәлән, уйын барышында уҡ уның һөҙөмтәһен 10-15 йөрөшкә тиклем алдан күрергә, дәғүәсеңдең йөрөштәрен күҙалларға тейешһең. Шашка уйынының һөҙөмтәләре балалар миҫалында асыҡ күренә: улар тәртиплерәк, үҙ аллыраҡ, ышаныслыраҡ булып китә, уҡыуҙары яҡшыра. Әлбиттә, балаһының шашка клубына йөрөүе ата-әсәләргә лә ҙур шатлыҡ. Сөнки тормошобоҙ тыныс һымаҡ күренһә лә, барыбер наркоманлыҡ, алкоголь, интернеттағы, ТВ-лағы кире күренештәр, компьютер уйындары кеүек агрессив йүнәлештәр балаларҙың психологияһына йоғонто яһай. Бала шул уйындарға, йүнәлештәргә бирелеп китһә, уны аҙаҡ тура юлға баҫтырыуы бик ауыр. Шашка был кире күренештәргә бер кәртә булып тора - бала уйларға, фекерләргә өйрәнә. Бөгөн шашка клубында шөғөлләнеүсе иң йәш балаға өс йәш ярым.

Икенсе яҡтан, мәктәпкә тиклем шашка клубына йөрөгән бала белем усағына психологик, эмоциональ яҡтан әҙерлекле булып бара, түҙемлелеккә, иғтибарлылыҡҡа, сабырлыҡҡа өйрәнә, логик фекерләүе үҫешә. Был спорт төрө бигерәк тә математиканы өйрәнгәндә кәрәк. Мәҫәлән, мәсьәләлә нимәлер бирелә һәм уның сиселешен табырға кәрәк. Шашка уйынында ла шулай: теге йәки был аҙымды яһарға яраймы, юҡмы? Яһаһаң, нимә килеп сығыуы мөмкин? Был шундай уҡ анализ, әммә уның формаһы икенсерәк. Беҙҙең тормош бит, ғөмүмән, анализға ҡоролған. Әйтәйек, кемдер һиңә нимәлер әйтте икән, һин уға яуап ҡайтарырҙан алда анализлап, нисек яуаптарға мөмкин икәнлеген уйлайһың, халыҡ мәҡәлендәгесә, ете уйлап, бер киҫәһең. Йәғни уй-фекер булмай тороп, эшеңдең һөҙөмтәһе лә булай. Мәҫәлән, "Титаник" кинофильмын алайыҡ. Уны бит кемдәрҙер уйлап сығарған, шунан кино итеп төшөргән, тамашасы уны шул тиклем оҡшатты, шуға ла фильмдың үҙкиммәте, касса йыйымдары әллә күпме килем килтерҙе. Һуңғы һөҙөмтәлә алған килем - ул бер уйҙың, идеяның хаҡы. Ул матди сығанаҡтан килгән, йәғни газ һатып, килем алыу түгел. Кешенең уйы шул тиклем ҡеүәтле, ул бөтөн нәмәне эшләй ала. Шул уҡ компьютер программаларын алһаҡ та, улар - кемдеңдер фекеренең хаҡы. Рәссамдарҙа ла шундай уҡ ижади процесс бара. Рәсемдә ниндәйҙер фекер ятырға тейеш, шунда ғына уның баһаһы күтәрелә. Иң мөһиме - уй, фекер, идея булырға тейеш. Идея кеше алдына маҡсат ҡуя, маҡсат алға барырға ынтылыш бирә.

Уҙған быуатта Барселонала архитектор Антонио Гауди шул тиклем матур биналар төҙөп ҡалдырған. Кешеләр, туристар хәҙер шул биналарҙы ҡарар өсөн генә меңәрләгән саҡрымдар үтәләр. Уйлап ҡараһаң, уның мираҫы - бай идеялары һөҙөмтәһе. Испания бай ил түгел, ҡаҙылма байлыҡтары юҡ, бары тик туризм менән йәшәйҙәр. Бер кешенең идеяһы үҙенән һуң килгән быуындарға ла йәшәү өсөн сығанаҡ булып тора. Туристар ағымы һис кәмемәй, сөнки кеше тыуып, үҫеп, туристар рәтен һәр саҡ тулыландырып тора.

## Яһалмаған ҡорал да бер тапҡыр ата

Фән өлкәһендә бөгөн фән менән шөғөлләнергә ҡарар иттең дә, иртәгә ғалим булып киттең түгел. Йылдар буйы уҡырға, сағыштырырға, күҙәтергә, тәжрибәләр үткәрергә, мәғлүмәт, аҡыл тупларға кәрәк. Аҡыл яйлап туплана, һөҙөмтәһе һуңынан күренә. Физик спортта ул һөҙөмтә тиҙерәк тә күренергә мөмкин. Беҙҙең интеллектуаль спорт төрөндә һөҙөмтәләр тиҙ генә килмәй. Билдәле ваҡыт, бәлки, бер нисә йыл үтергә мөмкин. Шуға, алыштарға әҙерһегеҙме, тип һораһалар, аныҡ ҡына, эйе, мин әҙер, тип әйтеп булмай. Беҙҙең әҙерлек әле генә башланмаған һәм әле генә тамамланмай ҙа. Ул йылдар буйы дауам итә. Бөгөн һөҙөмтә күренмәһә, киләһе ярышта күренеүе ихтимал. Гел беренсе урынға ғына өмөт итеп тә булмай. Әле ҡатын-ҡыҙҙар араһында Латвиянан Зоя Голубеваның, Голландиянан Нина Хукмандың, Украинанан Дарья Ткаченконың, Рәсәйҙән Матрена Наговицынаның көстәре тигеҙ. Мин уларҙы күҙәтеп барам: нисек уйнайҙар, нисек баралар, ниндәй формалалар. Ҡайһы саҡта ярышта һис уйламаған, көтөлмәгән дәғүәсе, беҙ уларҙы "темная лошадка" тибеҙ, килеп сыға. Ундай осраҡтар ҙа булғылай. Яһалмаған ҡорал да бер тапҡыр ата, тиҙәр бит, шуның кеүек, һис уйламаған кеше лә юғары баҫҡысҡа үрләүе мөмкин.

Шулай уҡ ярышта кемгәлер уңайлыраҡ мөмкинлектәр сығыуы - йәрәбәнең уңышлы булыуы, көсһеҙерәк дәғүәселәр эләгеүе, уйындың еңелерәк барыуы ихтимал. Кимәлдәр тигеҙ булһа ла, ошо уңайлыҡтар арҡаһында саҡ ҡына уңыш йылмайһа ла, ул кеше беренселекте алыуы бар. Шулай уҡ эмоциональ, психологик көсөргәнеш тә эҙһеҙ үтмәй.

Ярыштарҙан һуң да уйындарға анализ яһайһың, ул да бит шундай уҡ әҙерлек, туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ барған процесс. Артығын әҙерләнеп ташлаһаң да насар, сөнки мейе ял да итергә тейеш. Сөнки уйлау бит шундай уҡ ижади эшмәкәрлек. Ижади осош кәрәк, мейенең арыған сағында ундай халәт булмай.

## Алда булһа ҙур теләк...

Шашкала етди уйнай башлағас та үҙ алдыма донъя чемпионкаһы булырға тигән маҡсат ҡуйҙым. Һуңынан инде ниәтемә өлгәшеү өсөн нимәләр эшләргә тейешлегем тураһында план яҙҙым. Шуларҙың иң мөһиме - һәр көн алты-һигеҙ сәғәт күнекмәләр булырға тейеш. Ошо график буйынса бер йыл шөғөлләндем. Аҙаҡтан һөҙөмтә күренә башланы. Шул уҡ ваҡытта дәғүәселәремдең көнөнә алтышар-һигеҙәр сәғәт шөғөлләнмәгәнен беләм, һәр хәлдә, был турала ишеткәнем булманы. Шуның өсөн дәғүәселәремде үтеп китер өсөн уларҙан күберәк эшләргә, килеп сыҡмаһа, уларҙы ҡарап, күҙәтеп, анализ яһап, мөнәсәбәтте, ҡараштарҙы үҙгәртеп, ҡабаттан башларға кәрәк. Һәр ситуациянан сығыу юлы бар. Кимәлем көслө спортсыларҙыҡы менән тигеҙләнгәс, графикты үҙгәрттем. Сөнки бындай кимәл бөтөнләй икенсе ҡараш талап итә. Әйтәләр бит: таштарҙы йыйыу ваҡыты, уларҙы ташлау ваҡыты була, тип. Әҙерлек, маҡсат ҡуйыу - таштарҙы йыйыу ваҡыты, ә һөҙөмтә күренеү - уларҙы ташлау мәле. Ярыштарҙан һуң шашканы ҡулыма алмайым. Ҡайһы бер ваҡыт бер ай ял итәм. Мәҫәлән, Яҡутстанда уҙған ярыштарҙа 15 көн уйнаныҡ. Башҡортостан менән ваҡыт айырмаһы - дүрт сәғәт, өҫтәүенә, унда аҡ төндәр, йоҡлап булмай. Ҡайтҡас, айҙан ашыу ваҡыт эске резервты ҡабат тулыландырыуға китте. Сөнки шарттар шул тиклем ҡатмарлы булды.

## Тыуған ерҙә стеналар ҙа ярҙам итәме?..

Башҡортостанда көйәрмәндәр өмөтләнеп, ышанып еңеү көтә. Уларҙы ҡыуандырғы килә. Башҡа спорт төрҙәрендә эмоцияларыңды ҡысҡырып, шатланып сығарырға мөмкин, ә шашкала иң мөһиме - тыныслыҡ. Шауларға, көйәләнергә ярамай, сөнки беҙҙең спорт төрөндә тулҡынланыуҙың зыяны күберәк. Шуға ла ҡайһы саҡта өйҙә уйнауы ҡыйыныраҡ та була. Көйәрмәндәреңде уйламай, бар иғтибарыңды уйынға тупларға кәрәк. Ә республиканан ситтә уйынға ғына биреләһең. Шуға ситтә уйнауы еңелерәк тип уйлайым. Өйҙә еңелгәнем дә, еңгәнем дә бар. Ул уйындар еңел барманы, еңелеүҙе үтеп, еңеүгә килдем. Еңеүҙәремде сағыштырып ҡараһам, ситтә еңеү яулау еңелерәк, тигән һығымтаға киләм. Башҡортостанда, тыуған ерендә еңеү өсөн эске резервтарҙы күберәк сарыф итергә тура килә.

## Хаталарҙың баһаһы

Шашкалағы хаталар нисек яһала? Бер уйын яҡынса дүрт сәғәт килеп сыға. Өс сәғәт үткәс, кеше арый, ваҡыты ла әҙ ҡала, шунда хата ебәреү мөмкин. Уртаса бер уйын 50-шәр йөрөштән тора. Күберәген 40-сы йөрөштән башлап хаталар күренә башлай. Уйын башын-

***Мәктәпкә тиклем шашка клубына йөрөгән бала белем усағына психологик, эмоциональ яҡтан әҙерлекле булып бара, түҙемлелеккә, иғтибарлылыҡҡа, сабырлыҡҡа өйрәнә, логик фекерләүе үҫешә. Был спорт төрө бигерәк тә математиканы өйрәнгәндә кәрәк. Мәҫәлән, мәсьәләлә нимәлер бирелә һәм уның сиселешен табырға кәрәк. Шашка уйынында ла шулай: теге йәки был аҙымды яһарға яраймы, юҡмы? Яһаһаң, нимә килеп сығыуы мөмкин? Был шундай уҡ анализ, әммә уның формаһы икенсерәк.***

# ШАШКАЛА ЛА... ҡанундар бар



да хаталаныу, әлбиттә, бик һирәк. Стандарт булмаған ситуация булғанда - йә позицияңды ныҡлап аңлай алмағанда, йә дәғүәсең махсус рәүештә һине үҙ-үҙеңдән сығарғанда хата ебәреү ихтималлығы юғарыраҡ. Шундай "һөйкөмһеҙ" дәғүәселәр ҙә була: улар менән тыныслыҡты, һалҡын ҡанлылыҡты һаҡлауы ауырлаша, уларҙы мотлаҡ еңге килә. Тап шул саҡта һалҡын ҡанлылыҡ кәрәк тә инде. Техноген һәләкәттәрҙе анализлаһаҡ, улар бит бер сәбәптән генә түгел, ә төрлө сәбәптәр бергә тупланыуҙан килеп сыға. Интеллектуаль уйында ла шулай: хаталаныу өсөн бер генә түгел, бер нисә сәбәп булырға тейеш. Төрлө факттар, ситуациялар йыйылып, йыйылып килеп, бер хатаға әүерелә.

## Мин - Башҡортостан ҡыҙы

Һиндтарҙа тыуған еренән алыҫта йәшәргә мәжбүр булған кешене иң бәхетһеҙе тип иҫәпләйҙәр. Ысынлап та, ҡайҙалыр яҡшы тормош эҙләп күсенеп киттең дә ти, әммә Башҡортостандағы дуҫтарыңды, тауҙарыңды, йылғаларыңды, ҡайындарыңды, ҡылғандарыңды, хистәреңде, хәтереңде үҙең менән күсереп алып китеп булмай. Улар барыһы ла тороп ҡала, тормошоң да икегә бүленә. Икенсе яҡтан, яңы урында мөхит тә икенсе. Уға яраҡлашыу өсөн кеше тулыһынса адаптация үтергә тейеш, сөнки уның тотош организмы стресс кисерә. Ә стресс, ниндәй генә булмаһын, ҙурмы ул, бәләкәйме - үҙ эҙен ҡалдыра.

***15 йыл элек Ишембайҙағы Ә.-З. Вәлиди исемендәге башҡорт гимназияһында шашка уйынын дәрес итеп башланғыс кластарҙа аҙнаға бер тапҡыр уҡыта башланыҡ. Хәҙер уны киңәйтергә кәрәк. Әле Ишембайҙа һәм Яңауылда көслө балалар бар, улар хәҙер Өфөлә уҡыуҙарын да, шашка менән шөғөлләнеүҙәрен дә дауам итә. Беҙ һәләтле балаларҙы табып, уларға ярҙам күрһәтеп, күтәреп, үҙебеҙгә алмаш та әҙерләргә тейешбеҙ. Һәр өлкәлә күсәгилешлек булырға, ул системаға һалынырға тейеш. Шул ваҡытта ғына һәр өлкә көслө буласаҡ.***

Яр Саллыла тыуһам да, унда бик һирәк ҡайтам. Башҡортостанда үҫтем, бында минең туғандарым, дуҫтарым, бында минең көслө шашка мәктәбем, коллегаларым. Үҫеш өсөн был да бик мөһим. Сөнки яңғыҙ бер нәмә эшләп булмай, еңеү өсөн коллектив, команда кәрәк. Башҡортостанда башлаған эштәребеҙ ҙә бик күп. 15 йыл элек Ишембайҙағы Ә.-З. Вәлиди исемендәге башҡорт гимназияһында шашка уйынын дәрес итеп башланғыс кластарҙа аҙнаға бер тапҡыр уҡыта башланыҡ. Хәҙер уны киңәйтергә кәрәк. Әле Өфөлә Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт гимназия-интернатында (етенсе синыфтан башлап) һәм М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында был тәжрибә индерелде. Башҡа райондарҙа ла гимназиялар бар, тәжрибәне уларға ла таратырға кәрәк. Шашка дәрестәрен шашка клубының тренерҙары алып бара. Әле Ишембайҙа һәм Яңауылда көслө балалар бар, улар хәҙер Өфөлә уҡыуҙарын да, шашка менән шөғөлләнеүҙәрен дә дауам итә. Беҙ һәләтле балаларҙы табып, уларға ярҙам күрһәтеп, күтәреп, үҙебеҙгә алмаш та әҙерләргә тейешбеҙ. Һәр өлкәлә күсәгилешлек булырға, ул системаға һалынырға тейеш. Шул ваҡытта ғына һәр өлкә көслө буласаҡ.

Уҡыусыларҙың тормошонда шашка дәрестәре үҙ эҙен ҡалдыра. Әлбиттә, һөҙөмтәләрҙе хәҙер үк көтмәйбеҙ, улар һуңынан киләсәк. Беҙ әле ошо өс гимназияла тәжрибә туплайбыҙ ғына. Яҡутстанда Президенттарының указы менән бөтөн мәктәптәрҙең башланғыс кластарында - шашка, Ҡалмыҡстанда шахмат дәрестәре индерелгән. Тимәк, эйәрер өлгөләр бар, уны беҙҙә лә дауам итергә генә кәрәк.

## Көндәлек тормоштағы Тамара менән... донъя чемпионкаһы Тамара ниндәй?

Улар араһында бер ниндәй айырма ла юҡ. Дуҫтарым шул уҡ ҡалды - мәктәптә, институтта бергә уҡыныҡ, бергә ярыштарға йөрөнөк. Шул уҡ һауаны һулайым, шул уҡ ерҙән йөрөйөм. Ғөмүмән, ниндәй генә ситуация булмаһын, ниндәй генә бейеклектәр, исемдәр яуламаһын, вазифалар биләмәһен - кеше һәр саҡ үҙе булып, кеше булып ҡалырға тейеш. Бөгөн һин үрҙә икән, иртәгә түбәнгә төшөүең ихтимал. Тормошта төрлө хәлдәр була. Әгәр һин кеше менән дуҫһың икән, һин уның алдында яуаплылыҡ тойорға тейешһең. Дуҫлыҡ ул теге йәки был ситуацияға ҡарамай. Дуҫлыҡ - ул шундай уҡ йөк, яуаплылыҡ, тәртип. Шашкала фундаменталь принциптар бар. Уларҙы боҙорға, уларға ҡаршы барырға ярамай, уларҙы үҙгәртеп тә булмай. Мәҫәлән, дама, терәк ҡырҙары. Уларҙы нисек кенә теләһәң дә үҙең теләгән ҡырға күсереп булмай. Улар элек-электән нисек килә, шулай булып ҡала. Тормошта ла шундай уҡ фундаменталь принциптар бар. Мәҫәлән, тәмәке тартырға, алкоголь эсергә ярамай, тиҙәр икән, тимәк, ярамай. Беҙҙең клубта тәмәке тартыусылар юҡ тиһәң дә була. Йәки үҙеңә яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙарын теләһәң, үҙең башҡаларға яҡшы мөнәсәбәттә бул. Ошо принциптарға ҡаршы барҙың икән, улар һиңә ҡаршы бороларға мөмкин. Шуға күрә, кеше булып ҡалырға теләйһең икән, исем-вазифаларға эйә булғанға тиклем ниндәй булғанһың - шулай булып ҡала белергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, Тамараның һүҙе эшенән айырылмай. Дүрт тапҡыр донъя чемпионкаһы булыуына ҡарамаҫтан, ул һаман да балаларса ябай, ихлас. Маһайыу тигән төшөнсәнең әҫәре лә юҡ. Ниндәй илдәрҙә генә сығыш яһамаһын, туған башҡорт телен бер ваҡытта ла онотмай һәм тәмләп, яйлап, матур, таҙа итеп башҡортса һөйләшә. Хатта уның билдәләгән ваҡытҡа минутына ҡәҙәр теп-теүәл килеп инеүе лә милләттәшебеҙҙең характерының бер һыҙаты. Юҡҡа ғына, ябайлыҡта - бөйөклөк, тимәйҙәр. Беҙҙең өсөн "шашка батшабикәһе" булған Тамара Танһыҡҡужина тағы күпме генә еңеүҙәр яулаһа ла, уның бөйөклөгө - ябайлығында, милләтенең ҡыҙы булып ҡалыуында. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Эстонияның баш ҡалаһы Таллиннда шашкасылар араһында блиц буйынса Европа чемпионаты уҙҙы. Унда яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡҡужина беренсе турҙа уҡ лидерлыҡты ҡулына алып, еңеү яуланы.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ШАЙТАН ДА... йәйәүләп ҡасҡан

Намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған бер ауыл ағайы юлға сыҡҡан. Шунда уға таныш булмаған бер әҙәм эйәргән. Ауыл кешеһенән ҡайҙа барғанлығын һорашҡас, тегеһе:

- Ҡаланан ҡайһы бер кәрәк-яраҡ алаһы бар, шунда барам әле, - тип яуап ҡайтарған.

- Мин дә һинең менән барһам яраймы? Юлда яңғыҙ йөрөү эсте бошора бит, - тигән.

Ауыл ағайы ризалашҡан. Икәүләп юлды дауам иткәндәр. Бара торғас, бер йөҙөм баҡсаһына килеп етә былар. Теге ауыл ағайы әхлаҡһыҙ булыу өҫтөнә ҡараҡ та икән. Тиҙ генә баҡсаға инә лә йөҙөм ашарға тотона. Етмәһә, баҡсаға зарар килһен тип, тәлгәш-тәлгәш йөҙөмдәрҙе өҙөп, ергә ташлай. Юлдашы бының сәбәбен һорашҡас:

- Баҡса минеке түгел, зарары хужаһына булһын, - тип яуап ҡайтара.

Юлды артабан дауам итә былар. Бара торғас, бер ауылға килеп етәләр. Нәҡ шул ваҡыт мәсет манараһынан өйлә намаҙына саҡырып аҙан яңғырай. Аҙан тауышын ишеткәс, юлда эйәргән кешенең сырайы боҙолоп китә. Күҙ осо менән генә юлдашына ҡарап ала. Уның мәсеткә инергә һис тә ниәте юҡлығын һиҙенгәс, һорай:

- Намаҙ уҡырға инмәйһеңме ни?

- Мин намаҙ уҡымайым, ураҙа ла тотмайым.

- Улайһа, туғаным, мин һиңә юлдаш була алмам.

Ауыл ағайы аптырап ҡала.

- Ниңә улай? Мин бит һиңә бер ниндәй ҙә насарлыҡ эшләмәнем.

- Дөрөҫ, минең алда бер ғәйебең дә юҡ. Ләкин бына һине лә, мине лә яратҡан Аллаһ ҡаршыһында ҙур ғәйебең бар.

- Нисек? Һүҙеңде әйтеп бөтөр, зинһар.

- Күпме юл үттек, ә һин Аллаһ хупларлыҡ бер нәмә лә эшләмәнең. Киреһенсә, ул хупламаясаҡ ғәмәлдәр ҡылдың. Кеше баҡсаһына индең, уға зарар килтерҙең. Аҙан тауышын ишетә тороп, намаҙ уҡырға ла ниәтең юҡ.

Ауыл ағайы уйға ҡала.

- Дөрөҫ һөйләйһең, әммә һин дә намаҙ уҡымайһың бит?

- Уҡымайым, сөнки мин кеше сүрәтенә ингән шайтанмын. Аллаһы Тәғәләнең бер генә әмеренә ҡаршы килгәнем өсөн дә уның хозурынан ләғнәтләнеп ҡыуылдым. Ә һин бер көн эсендә генә лә уның нисә әмерен үтәмәнең? Һине тоғро юлдан яҙҙырырға теләгәйнем. Ләкин хәҙер күрәм, һин минән дә аҙғыныраҡ икәнһең! Шайтан булыуыма ҡарамаҫтан, һинең кеүек гонаһлы бәндәнән ҡурҡам, шуға күрә лә яныңдан тиҙерәк китә һалам.

Шулай ти ҙә шайтан китеп бара. Ауыл ағайы башын ике ҡулы менән тотоп уйға сума: "Ҡара инде, ә! Хатта шайтан да минән ҡаса... Мин унан да гонаһлыраҡ микән ни?" Шунан күңеленән урғылып ташҡан үкенеү хисенә түҙә алмайынса, илап ебәрә.

- Йә, Рабби! Мине ғәфү ит! Бөтөн гонаһтарым өсөн тәүбә итәм. Бүтән һинең әмереңдән сыҡмаясаҡмын!

Шул һүҙҙәрҙән һуң был әҙәм, тиҙ генә тәһәрәт алып, намаҙға баҫа. Ҡалған ғүмерендә бүтән бер әшәкелек тә эшләмәй.

***✓ Әле лә үҙенә төбәлгән тимер ырғаҡ шикелле үткер тырнаҡтарҙы күҙ алдына килтерһә, тәне зымбырлап китә. Шул мәлдә һөжүмен аҙағынаса еткергән хәлдә, уҫлаптай йыртҡысҡа ҡаршы малай бер ни ҙә ҡыла алмаҫ ине.***






Бөркөттәр ҡалған ике балаһын аҫырап, имен-аман ғына осора алды. Яҡын-тирәләге башҡа ояларҙа ла үрсем һәйбәт булды. Таҙғара тоҡомо ишәйеп үк китте. Күҙгә күренеп кәмей, һирәгәйгәндән-һирәгәйә барған ғорур ҡоштоң шулай ҡапыл күбәйеүенә Кеше ҡыуанып бөтә алманы. Ысынлап та, таҙғара һуңғы мәлдәрҙә үтә йыш осрамай башлағайны шул.

Шулай ҙа Кеше иртәрәк тантана итеп, алданыраҡ ҡыуанған икән. Көҙ етеүгә, урман шаулатып, тау һелкетеп таш аҡтарып, ерҙең аҫтын-өҫкә әйләндереүҙән кейек өркөтөп, Урал һыртына леспромхоз техникаһы килеп тулды. Юлдарында улар бер ағас, бөртөк тал сыбыҡ ҡалдырмай, ҡырып-һепереп бара. Һәр төрлө йәнлек-ҡоштоң өйө булыр дөм-ҡараңғы урман үҫкән ерҙә арттарынан ҡола ялан да, йәнһеҙ бушлыҡ ятып ҡала. Ҡыш башында көтөүе менән осоп йөрөгән таҙғаралар күп тә үтмәҫтән ғәйеп булып бөттө. Уларҙың ҡайҙа олаҡҡандарын бер кем дә аңлата алманы.

Киләһе яҙҙы бары бер пар ғына ҡош ҡаршыланы. Әле бына баш осонда әйләнә-әйләнә күк көмбәҙен байҡағаны бөркөттәрҙең һуңғыһы. Эйе, әле йәй башында ғына икәү ине улар, парлы ине. "Их, ҡомһоҙ әҙәмдең ҡанһыҙлығы!" тип эстән янып әсенә Кеше.

...Күпме ваҡыт үтте әле ул фажиғәгә? Көнө теүәл иҫендә ҡалмаған. Бөгөнгө һымаҡ аяҙ, сыуаҡ ине. Кеше, көндәгесә үҙ биләмәләрен байҡап, үҙенә тәғәйен ышанып тапшырылған тәбиғәт мөйөшөнә күҙ-ҡолаҡ булып, бер ниндәй хәүеф-хәтәр һиҙмәй бара. Һауала, ғәҙәттәгесә, инде күнегеп бөтөлгән ишле таҙғаралар әйләнә. Сираттағы ҡорбанын һағалай улар, яңыраҡ йомортҡа ярып сыҡҡан балалары ас булмаһын өсөн тырышып ятҡан көндәре. Күптән таныш булһа ла, урман ҡарауылсыһының ояларына яҡынлашыуын тойомлап, һирәк-һаяҡ үҙенсәлекле тауыш бирә, үҙҙәренә генә аңлайышлы телдә иҫкәртәләр. Йәнәһе, артыҡ яҡын килмә, Кеше, был хәүефле! Һәм Кеше, уларҙың телен төшөнгәндәй, йүнәлешен үҙгәртә биреп, һөҙәк битләс буйлап китә.

Ҡарамаҡҡа хәтәр ҙур ошо ҡоштарҙан Кеше малай сағында ифрат шөрләй торғайны. Шулай булмай һуң! Кәзә, һарыҡ бәрәстәрен, елберләтеп, еңел генә күтәреп ала ла китәләр ине бит. Берәҙәк эттәргә лә уларҙан көн булмай торғайны. Бер тапҡыр, яңғыҙы ғына бесәндән ҡайтып килгәнендә, уҫал таҙғара хатта малайҙың үҙенә һөжүм итте. Уҡалы түбәтәйенә тейә яҙып шыҡыйып үтеүгә, ҡанат еле ҡағылып ҡаурыйҙары геү итеп ҡалды. Уғата ҡото алынған малай, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ҡарағура араһына тәкмәс атты. Ярай әле кәрәк сағында ҡарағураһы булды. Түбә сәсһеҙ ҡалыуҙан уны ошо ғына ҡотҡарҙы. Салҡан ятҡан килеш шунда, яп-яҡындан һоҡланып та, ҡалтыранып та күҙәтте ул. Йыртҡыс бүрәнең арҡа һөйәген бер тибеүҙә һындырыр кәкре тырнаҡтар, маңлайыңды бер суҡыуҙа тишер көмөрө суҡыш, ут сәсеп торған, йән өшөткәс дәһшәтле ҡараш. Ә ҡанаттары! Өс ҡоласың да етмәҫ! Муйыны, башы үҙенең ерән һымаҡ күренде. Ҡояшҡа йылҡылдап тора. Гүйә, алтынға мансылған. "Алтынбаш" тип исем дә ҡушҡайны әле малай шул саҡта. Ғәжәп матур, ҡурҡыу белмәҫ ошо йыртҡыстың ҡара-көрән шомло шәүләһе һуңынан төштәренә кереүҙән баҫлығып байтаҡ ыҙаланы. Әле лә үҙенә төбәлгән тимер ырғаҡ шикелле үткер тырнаҡтарҙы күҙ алдына килтерһә, тәне эҫеләһыуыҡлы булып, зымбырлап китә. Шул мәлдә һөжүмен аҙағынаса еткергән хәлдә, уҫлаптай йыртҡысҡа ҡаршы малай бер ни ҙә ҡыла алмаҫ ине. Күрәһең, уны Хоҙай үҙе аралағандыр. Ҡанаты аҫтына алып, гонаһһыҙ сабыйҙарҙы фәрештә үҙе ҡурсалап тора, ти бит ...

Йылымыс быу бөркөп ятҡан дымлы ер өҫтөндәге барлыҡ хәрәкәт зәһәр ҡарашлы ҡоштарға ап-асыҡ күренә. Ана, иртәнге талғын елгә үлән һелкенеп ҡуя, ҡыяҡ осонда эленеп торған саф ысыҡ тамсыһы сиҙәмгә тама, һәлмәк иңкеш ҡуныуҙан сәскә эйелә, уҫаҡ япрағы елпелдәй. Берейһен дә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмай сөм-ҡара үткер күҙҙәр. Ана тағы сысҡан төртөндөһө араһынан ер тишкес йыбырлап уҙҙы. Ашарға яраҡлы булһа ла бөркөт унын ише ваҡ-төйәк артынан ҡыуып көс тә сарыф итмәйәсәк, ваҡыт та уҙғармаясаҡ. Бөркөт бөртөк сүпләмәҫ тигәндәй, сысҡан тибеү бөркөт эше түгел, унын өсөн елбер торомтай бар. Йылғыр кеҫәрткенең юрғалап уҙғаны ла, ҙур йәшел синерткәнең һикергәне лә күҙҙәренә генә салынып ҡала бөркөттәрҙең.

Таныш Кеше атлаған тарафтан борғоланып ятҡан һүрән һуҡмаҡ буйлап килгән тауышһыҙ ят еңел машина күренде. Унын көмөш буяуы, ҡояш нурҙарында ялт-йолт итеп, күҙҙәрҙе сағылдырып уҙа. Был тирәләрҙә һирәк күренеп ҡалған тәгәрмәсле януарҙан өрккән ҡоҙғон йылп итеп осоп үтте лә, йәмһеҙ ҡоңғолдап, шырлыҡ араһына инеп боҫто. Башҡа саҡта һис бер нәмәнән ҡурҡмаҫ һөмһөҙ ҡоҙғондоң ҡоҙғоно бөркөттәрҙе шәйләп, йәнен аяп ятҡан көнө. Машина юлһыҙ, соҡор-саҡырлы ерҙә сайҡала-сайҡала әкрен генә алға, бөркөттәр әйләнгән тәңгәлгә, шыуышты. Ерҙе үтекләп килде лә, ҙур аҡлан уртаһында теләр-теләмәҫ кенә туҡтап ҡалды. Бер аҙҙан машина эсенән тап-таҡыр итеп ҡырылған, ялтыр башлы әҙәм сыҡты. Быныһының да ҡулында Кешенең иңбашындағына оҡшаш кәкре таяҡ. Шуны ике ҡуллап тотоп, ялтыр баш йылы һауа ағымдарында талғын ғына бәүелеп сайҡалған ҡоштарға йүнәлтте. Шул әҙере шыҡ иткән тауыш ишетелеп ҡалды ла, эргәләренән күҙгә күренмәҫ ниҙер һыҙғырып үтеүгә, ата бөркөттөң түш ҡаурыйы туҙғып китте. Унын ауыр кәүҙәһен һауала тотҡан ҡеүәтле ҡанаттар ҡапыл ғына хәлһеҙ һәленеп төштө. Аҫтан көслө шартылдау тауышы килеп еткәндә мәшһүр ҡоштоң йәнһеҙ кәүҙәһе, ялбыр-йолбор килеп, гүйә, күктән атылған таш ише, ергә осто. Бөтмәҫ уйҙарға бирелеүҙән донъяһын онотоп вайымһыҙ килгән Кеше, мылтыҡ тауышына һиҫкәнеп, кинәт өҫкә ҡараны. Бер бөркөттөң ҡолап килеүен күреп, ул йүгерә-атлай шул яҡҡа йүнәлде. Ялтыр баш та, ҡыуанышып һөрән һалған иптәштәрен эйәртеп, әле генә йәнен ҡыйған ҡорбаны янына ашыҡты. Ҡаҡ ергә бәрелеп онталған, ярым асыҡ суҡышынан ҡан һарҡып торған, әле йәне сығып та өлгөрмәгән бөркөттө тәпәйҙәренән эләктереп, өҫкә күтәрҙе, үҙенең ауыҙы йәмһеҙ йырылып ҡолағына етте.

- Шәп ҡарасҡы буласаҡ бит, ә!

Ялтыр баш тойғоларын йәшереп тормайынса тантана итә.

- Вовандың танауына сирттең тәки!

- Эсе яныр инде быны күреп!

Ҡалғандары уны йөпләгән булып яһалма көлөшә. Күренеп тора: йәпәтәйҙәр өйөрө.

Ә инә бөркөт ҡыҙғаныс, шул уҡ ваҡытта уҫал итеп бер нисә тапҡыр саңҡылдап ҡуйҙы. Ошо саңҡылдауҙа аяныс ҡатыш бөтмәҫ-төкәнмәҫ нәфрәт һәм хәсрәт тә ишетелеп ҡалды. Шул саҡ яһилдар янына ярһыған Кеше килеп етте. Етте лә, ҡулдарын болғай-болғай тегеләргә ниҙер ҡысҡырырға

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**293**

Йәнем йәннәт күрһен тигән кеше
Хужа булһын ике ағзаһына:
Бер ағзаһы - теше араһында,
Икенсеһе - бото араһында.

**294**

Рәсүлде уратып ултырып,
Тыңлайҙар мөридтәр уй-фекер.
Ишеккә Мөхәммәт ҡараны,
Күренде мәсеттә бер фәҡир.

Мосолман йолаһы буйынса
Ултырҙы буш ергә - өлөшө.
Кем белгән, янында бай икән,
Ҡыҫтырып еләне салғыйын,
Ҡуйҙы бай ситкәрәк шылышып.

Күрҙе лә пәйғәмбәр һораны:
- Ярлылыҡ һиңә был фәҡирҙән
Йәбешер тип әллә ҡурҡтыңмы?
- Юҡ Рәсүл, ундай уй юҡ бер ҙә!

- Малыңдың әллә бер өлөшө
Күсер тип ҡурҡтыңмы фәҡиргә?
Бай әйтә пәйғәмбәр һүҙенә:
- Юҡ Рәсүл, ундай уй юҡ бер ҙә!

- Был күршең ҡағылһа, кейемең
Бысрар тип ҡурҡтыңмы әллә һин.
Ишетелә әйткәне был байҙың:
- Юҡ, тимен, эй Рәсүл, билләһи!

- Әләйһәң ниңә һуң янтайҙың
Сиркәнеп, рәнйетеп күршеңде
- Гонаһлы эш ҡылдым,
Хоҙайым
Кисерһен был гонаһ эшемде!

Булған бар малымдың яртыһын
Алһынсы был мөъмин туғаным.

Ә фәҡир яуаплай:
-Алмайым.
-Ниңә? - тип пәйғәмбәр һораны.

- Ҡурҡамын, байлыҡтан маһайып,
Ҡанһыҙ бер тәкәббер булыуҙан.
Туғаным мөъмингә ҡарата
Был байҙай гонаһ эш ҡылыуҙан.

**295**

Өсәүләшеп оҙатыусы ерҙән кешене
Ғаиләһелер, мөлкәтелер, ҡылған эшелер.
Ғаиләһе, мал-мөлкәте тороп ҡаласаҡ,
Ҡылған эштәр аҙаҡҡаса оҙатып барасаҡ.

**296**

Яҡыныраҡ ҡылыр Аллаһ
Ике иптәштән иң шәпте,
Иптәшенә яҡшылыҡты
Күберәк ҡылған иптәште.

**297**

"Иртәгә өлгөрөрмөн,
Бөгөнгә тороп торор!" -
Шулай тип ултырған аҙаҡ
Төп башына ултырыр.

**298**

Бәндәләр талап иткәнсә
Үтәлһә дәғүә-теләк,
Бер нәмә лә ҡалмаҫ ине
Ил-милләт мөлкәтенән.

**299**

Таң атҡан икән,
Уҙған кисте уйлауҙан ни файҙа?
Кис еткән икән,
Уҙған таңды уйлауҙан ни файҙа?

**300**

Дуҫлыҡ мираҫ булып һиңә күсә,
Ә нәфрәтте мираҫ итеп алаһың.

**301**

Телеңде тый, телеңде тый,
Телеңдән тик яҡшы һүҙ ҡой.

**302**

Ил өсөн файҙаһыҙ ғилемдән
Баш тарттым, я раббым,
Рухымды күтәрмәҫ хеҙмәттән
Баш тарттым, я раббым,
Раббымдан ҡурҡмаған йөрәктән
Баш тарттым, я раббым,
Һин, раббым, ишетмәҫ доғанан
Баш тарттым, я раббым.

**303**

Аллаһ ҡаршыһында әҙәми зат
Үҙ абруйын асыҡлауҙан алда
Белһен шуны: үҙенең күңелендә
Ниндәй урын алып тора Аллаһ?

***

Был тормошта беҙ бит ҡунаҡ ҡына,
Тормош өсөн мәсет - төп йорттор.

Йөрәгеңде мәрхәмәткә өйрәт,
Һуғар уны ҡайнар йәшең менән,
Ут-һағышҡа сорнап сыныҡтыр.

**(Аҙағы).**

тотондо. Бəхəс ҡубып, ыҙғыш башланды. Ялтыр баш кəкре таяғы менəн килтереп Кешенең моронона төртөүгə уныһы оҙон үлəн араһындағы бысҡылға мүкəйлəп барып төштө лə, йөҙтүбəн килеш хəрəкəтһеҙ ҡалды. Инə бөркөт йəн асыуы менəн йəнə саңҡылданы, һауа ярып һыҙғырған ҡанаттарын йыйып, йəшен уғы ише түбəн ташланды. Ҡот осҡос тиҙлек менəн шыҡыйып барып, уны-быны уйламай маһайып, туҡтауһыҙ лабырлап торған Ялтыр баштың түбə ҡойҡаһын күҙ асып йомған арала һыҙырып алды ла китте. Уныһы йəн өҙгөс итеп аҡырып ебəрҙе лə, ҡанға туҙып, иҫһеҙ ятҡан Кеше янына барып ауҙы. Шарт-шорт иткəн тауыштар урман һиллеген боҙҙо. Инə бөркөттөң уң яғынан да, һул яғынан да баяғы ише күҙгə күренмəҫ нимəлəрҙер сыйылдашып уҙҙы. Береһе хатта ҡойроғона ҡағылып үтте, шулай ҙа ҙур зыян яһаманы. Бер бөртөк ҡаурыйын өҙөп төшөрҙө, тейгəн бар зыяны шул булды. Ҡаурый, хужаһы менəн хушлашҡандай, өйөрөлə-сөйөрөлə əкрен генə аҫҡа осто. Ҡаршы иҫкəн киҫкен ел ҡошто кинəт өҫкə сойорғотто. Байтаҡ күтəрелгəс, ул тырнағы осонда ялпылдаған тире киҫəген суҡып ҡараны һəм, ытырғанып, шунда уҡ тырнаҡтарын яҙҙы. Араҡы менəн тəмəке еҫе һеңгəн һаҫыҡ ҡойҡа осмото əҙəм аяғы баҫмаған серек һаҙлыҡҡа батты.

Əле генə кəпəренеп, ер йөҙөнə һыймаған төҫлө йөрөгəн Ялтыр башты күмəклəп көмөш машинаға һалдылар. Башы уның инде ялтырамай ине. Күҙ сағылдырып торған таҡыр баш шул арала уҡмашып ҡанға батҡан һөйəк киҫəгенə əйлəнгəйне.

Шунда уҡ ҡуҙғалған машина үҙе менəн ата бөркөттө лə алып китте. Ошоно асыҡ күргəн ныҡыш инə бөркөт машинаны, урман бөтөп, икһеҙ-сикһеҙ яландар башланған ерҙəргə тиклем оҙатып барҙы. Шул рəүешле, күрəһең, балаларының атайҙарын йолоп, ҡотҡарырға өмөтлəнде. Шаулап-ҡайнап торған ҡалаға барып ингəн көмөш машинанан күҙ яҙлыҡтырғандан һуң ғына уның аҡтыҡ өмөтө өҙөлдө. Фажиғə булып үткəн урынға əйлəнеп килеүенə Кеше тороп баҫҡайны. Ул, аяҡтарын көскə һөйрəп, тəнтерəклəй-тəнтерəклəй ҡайтыу яғына ыңғайланы.

Ана шул ҡəһəрле көндəн бөркөт япа-яңғыҙы ҡалды. Хəҙер яңғыҙ-ярым көйө, ике бала аҫырайым, уларҙың ҡанаттарын нығытам тип нужа күрə. Үҙе аслы-туҡлы көн итһə лə, балаларын əсə наҙынан мəхрүм итмəй, ваҡытында туйындырып та, йылындырып та өлгөрə. Ə төндəрен, яҡынының йəнен ҡыйған Ялтыр башлы əҙəм төштəренə кереүҙəн, тертлəп уяна. Шарт-шорт килеп мылтыҡ атҡандары, иһаһайлап көлөшкəндəре ҡолағына салынып ҡалғандай була...

**(Аҙағы).**

ЗАУЫҠ

# ТОРАТАУҘЫҢ ҠӨҘРƏТТƏРЕ СИКҺЕҘ:

## Көсөн бирə бында бар Йыһан

### Ил инəһе əйткəне

*Аң булығыҙ! Ни яҙһаң да*
*Түҙə ҡағыҙ.*
*Торатауға, зинһар өсөн,*
*Ҡағылмағыҙ!*

*Кем таларға бирə тыуған*
*Төйəктəрен?*
*Ҡуҙғатмағыҙ əүлиəлəр*
*Һөйəктəрен!*

*Сыңғыҙхандың ҡəберен асҡас,*
*Һуғыш сыҡҡан,*
*Ə Торатау Еребеҙгə*
*Беҙҙең ҡалҡан.*

*Торатау бит бөкө һымаҡ -*
*Башы таҡыр.*
*Ҡуҙғатһағыҙ уны Ерҙə*
*Туфан ҡалҡыр!*

*Ҡуҙғатһағыҙ, килер Ергə*
*Ахырызаман!*
*Йə, əйтегеҙ, кемдəрегеҙ*
*Бахыр һаман?!*

*Аҡса ҡоло! Уйламаған*
*Алдағыһын…*
*Аҫаба йəн шуны нисек*
*Аңламаһын!*

*Һеҙҙең өсөн оялыштан*
*Булдым көйөк…*
*Торатауға ҡағылмағыҙ,*
*Аллаһ - Бөйөк!*

### Батырҙарҙың əйткəне

*Торатауға ҡағылмағыҙ, зинһар,*
*Ул байҙарҙың быуа алҡымын.*
*Тауын ғына һаҡлар хəле барҙыр*
*Ажар рухлы башҡорт халҡының?!*

*Ил байлығын уйһыҙ таратырға…*
*Шуның өсөнмө ни баш һалдыҡ,*
*Һеҙ түгелме ергə ысын хужа,*
*Һеҙ түгелме илдə баш халыҡ?!*

*Миллəттəштəр! Тауға йоғоноусы*
*Бахыр ғына йəн бит, бер өтөк,*
*Батыр ирҙəр ҡайҙа? Ни арала*
*Бөтөргəндəр һеҙҙе өркөтөп?!*

*Ил ирҙəре, ғəмһеҙ булмағыҙсы,*
*Күтəрегеҙ əле башығыҙ!*
*Талпан булып ергə йəбешегеҙ,*
*Ҡалҡан булып илгə баҫығыҙ!*

*Илгə ҡалҡан булыр инек беҙ ҙə,*
*Ятып ҡына ҡалдыҡ алыҫта.*
*Торатауҙы яҡлай алмаһағыҙ,*
*Ер-һыуҙарҙы һаҡлай алмаһағыҙ,*
*Барыһы ла һеҙҙең намыҫта!*
*Барыһы ла һеҙҙең намыҫта…*

### Сəсəндəрҙең əйткəне

*Аслы-туҡлы түгелһең,*
*Шыр-ялаңғас түгелһең:*

*Өҫтəлеңдə һыйҙар бар,*
*Һимертелгəн ҡуйҙар бар,*
*Күңел асһаң, туйҙар бар,*
*Ҡайғы баҫһа, уйҙар бар.*

*Бер хəсрəт һəм ҡайғыңыҙ,*
*Йəшəй бөгөн ҡайныңыҙ?*



*Бер хəсрəтһеҙ шул йəшəй*
*Кемдең йəнен май бөргəн,*
*Бер ҡайғыһыҙ шул йəшəй*
*Кем иленə төкөргəн.*

*Һин бахырмы был илдə,*
*Һин батырмы был илдə?*

*Бахыр булһаң, боҫоп ят,*
*Баш күтəрмəй, иҙəндə.*
*Батыр булһаң, ҡаршы сыҡ*
*Илгə бəлə килгəндə!*

### Аҡһаҡалдар əйткəне

*Һай, аҫаба ырыу башлыҡтары,*
*Һеҙ түгелме бында ҡор йыйған?*
*Торатауҙың ҡөҙрəттəре сикһеҙ:*
*Көсөн бирə бында бар Йыһан.*
*Һеҙ бит быны күптəн белəһегеҙ,*
*Кəрəкме ни əйтеү ҡабаттан?*
*Хоҙай беҙҙе ошо изге ерҙең*
*Һаҡсылары итеп яралтҡан.*
*Хəтерегеҙ мүклəндеме əллə*
*Тауыш-тынһыҙ ниңə бөтəгеҙ?*
*Йыйылышып йəнə ҡор йыяйыҡ,*
*Торатауҙа һеҙҙе көтəбеҙ!*
*Торатауҙа булыр бөтəбеҙ!*

### Əүлиəлəр əйткəне

*Ишелһə лə тауҙар*
*Бер-бер артлы,*
*Ҡире аҡһалар ҙа*
*Йылғалар,*
*Эй, Торатау!*
*Ҡағылмаҫтар һиңə:*
*Һаҡлап торор*
*Беҙҙең доғалар…*
*Хоҙай ҡушмаҫ*
*Һине тəлəфлəргə,*
*Ə шулай ҙа*
*Уяу булығыҙ!*
*Дөрөҫ микəн*
*Йəшəү рəүешегеҙ,*
*Иманлымы*
*Ҡыуған юлығыҙ?!*
*Кешелəр бит хəҙер*
*Ни эшлəптер*
*Уйһыҙ-ғəмһеҙ*
*Ҡурсаҡ һымаҡтар…*
*Торатауҙы*
*Эйе, беҙ һаҡларбыҙ,*
*Үҙегеҙҙе бына*
*Кем һаҡлар?!...*

**Зөлфиə ХАННАНОВА,**

**Шəйехзада Бабич исемендəге республика йəштəр премияһы лауреаты.**

*✓ Барыбыҙ ҙа күңелдән Аллаһтың барлығына, Мөхәммәт - Аллаһтың рәсүле икәненә ышанабыҙ, зәкәт тә бирергә тырышабыҙ. Ә бына мосолманға үтәлеүе фарыз булған иң мөһимен - намаҙ һәм ураҙа ғәмәлен үтәмәйбеҙ!*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҠАЛА ЫҒЫ-ЗЫҒЫҺЫНАН...

## физик әүҙемлек арындырыр

■ Үҫмерҙәр араһында үткәрелгән һорау алыуҙар белгестәргә балаларға әсәләре менән мөнәсәбәттәрендә нимә мөһимерәк икәнлеген асыҡларға мөмкинлек биргән. АҠШ ғалимдарының Иҡтисади һәм социаль тикшеренеүҙәр буйынса милли совет ярҙамында үткәргән тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, яҡшы әсәй менән тәүлектең бөтә ваҡытында ла һөйләшергә була, ул улының йәки ҡыҙының фекерен ихтирам итә, уның менән ғәҙел һәм балаһы хаталанһа ла, уны яратыуҙан туҡтамай.

■ Һеҙ үҙ-үҙегеҙ менән һөйләшәһегеҙме? Торонто психологтары әйтеүенсә, үҙ-үҙең менән эске диалог алып барыу хатта файҙалы ла икән. Был эмоцияларҙы контролдә тоторға булышлыҡ итә һәм дөрөҫ булмаған ҡарар ҡабул итеүҙән һаҡлай. Тикшеренеү үткәреүселәрҙең фекеренсә, кеше үҙен контролдә тоторға тырышып, үҙ-үҙе менән аралаша башлай. Эске тауыш бигерәк тә тиҙ ҡыҙып һәм тәьҫирләнеп барыусан кешеләргә ҙур ярҙам күрһәтә.

■ Кешенең холҡон уның яратҡан төҫөнә ҡарап билдәләү психологияла күптән ҡулланыла. Әммә уның классификацияһы дөрөҫ түгел, тип билдәләй Ульрих университеты ғалимдары. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, мәҫәлән, аҡ төҫ паклыҡты, яҡшы холоҡто түгел, ә кешенең консерваторлығын билдәләй. Ҡара төҫтө тиҙ генә асылып бармаған кешеләр һайлай. Ҡыҙыл төҫ эгоизм тураһында һөйләй. Үҙен тулыһынса гармонияла тойған кеше зәңгәр төҫтө һайлаусан. Һары төҫтө йомшаҡ күңелле кешеләр һайлай, улар менән идара итеүе лә еңел. Алһыу төҫ елбәҙәклек тураһында белдерә.

■ Ғалимдар корицаның майлы аҙыҡтың кеше организмына кире тәьҫирен кәметеү һәләтенә эйә булыуын асыҡлаған. Табиптар әйтеүенсә, төрлө тәмләткестәр нигеҙендә төҙөлгән диеталар күпкә тәьҫирлерәк һәм файҙалыраҡ. Пенсильвания университеты (АҠШ) хеҙмәткәре Шейла Вест белдереүенсә, майлы ризыҡ ҡанда триглецеридтар кимәленең күтәрелеүенә килтерә. Был йыш ҡабатланып торһа, йөрәк ауырыуҙары барлыҡҡа килеүе ихтимал. Быны булдырмау өсөн майлы аҙыҡҡа традицион һинд кухняһына ҡараған тәмләткестәр, мәҫәлән, куркума йәки корица өҫтәргә кәрәк, ти белгестәр.

■ Билдәле булыуынса, бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да бәләкәсегеҙ яратып уйнаясаҡ. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк, ти белгестәр.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтлелегегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар тараласаҡ.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Һәр бер китап магазинында йәиһә һәр мәсеттә һатыла ул "Ғибәҙәти исламия". Был китапты уҡып сыҡҡан кеше "Кем була ул мосолман?" тигән һорауға яуапты белергә тейеш. Хәйер, хәҙерге ваҡытта башҡорт, татар, хатта урыҫ телендә лә Ислам дине тураһында әҙәбиәт бик күп. Арабыҙҙа бик күптәр шундай китаптарҙы һатып ала, ләкин, үкенескә күрә, улар өйҙәге кәштәләрҙә уҡылмай ятыусан. Ҡайһы берәүҙәр хатта уларҙы ниндәйҙер бер тылсымлы бетеү һымаҡ кәҙерләп, балаларының буйы етмәгәнерәк ергә йәшереп ҡуя әле ул. Һөҙөмтәлә, улар уҡылмай һәм өйрәнелмәй ята бирә. "Ҡартая башлағас өйрәнермен әле", ти улар үҙҙәрен үҙҙәре тынысландырып. Бында тағы бер һорау килеп тыуа: ә ҡартлыҡ йәшенә барып етеүеңә ниндәй гарантия бар? Уны бер Аллаһ сөбхәнә үә Тәғәлә үҙе генә белә!**

# ҠАРТАЙҒАС БАҪЫРМЫН НАМАҘҒА, ТИҺЕҢДЕР...

## ҡартлығыңа тиклем барып етерһеңме һуң?

Ни өсөн беҙ Ислам дине ҡағиҙәләрен белергә ашыҡмайбыҙ һуң? Нимә яҙылған икән ул китаптарҙа, тип ниңә ҡыҙыҡһынмайбыҙ? Ә бына нимә яҙылған: "...Һәр бер мосолман намаҙ уҡырға, ураҙа тоторға, зәкәт бирергә, хәленән килһә, хаж ҡылырға бурыслы!" Ә унан алда - һәр мосолман "Лә иләһә иллаллаһ, Мөхәммәдрәсуллаһ", тип күңеле һәм теле менән иман килтерергә бурыслы.

Барыбыҙ ҙа күңелдән Аллаһтың барлығына, берлегенә, унан башҡа һис тәңре юҡлығына, Мөхәммәт - Аллаһтың рәсүле икәненә ышанабыҙ, мөмкин тиклем зәкәт тә бирергә тырышабыҙ. Ә бына мосолманға үтәлеүе фарыз булған иң мөһимен - намаҙ һәм ураҙа ғәмәлен үтәмәйбеҙ! Ни өсөн? Сөнки иренәбеҙ, ялҡауланабыҙ. Намаҙ һәм ураҙа - муллалар һәм руханиҙар эше тип кенә уйлайбыҙ һәм бик хаталанабыҙ! Намаҙға өйрәнергә ваҡыт юҡлығына һылтанабыҙ. "Пенсияға сыҡҡас өйрәнермен әле..." тигән кешеләр күп. Ә инде пенсияға сыҡһалар: "...Хәҙер ҡартайылды, хәтер насар, сүрә-аяттарҙы ятлап булмай", - тиҙәр. Һүҙ ыңғайында әйтеп китәйем: әсәйем, мәрхүмә, һикһән йәштән уҙғас та яңынан-яңы доғалар, сүрәләр, аяттар ятлап ултыра торғайны.

Йыбаныу, һәр төрлө сәбәптәр табып намаҙ уҡырға өйрәнмәү, ураҙа тотмау - ул ҙур гонаһ, тиелә китапта. Намаҙ өйрәнеүгә һәм уҡырға ваҡыт юҡ тиеүселәр өсөн тағы бер миҫал килтерәм: Сибай мәсетенә намаҙға һәр йомала 140-лап ир-ат килә (мин әле ҡатын-ҡыҙҙарҙы иҫәпкә алмаһым). Уларҙың һәр береһенең эше, кәсептәре бар: ябай комбинат эшсеһе, институтта уҡытҡан фән кешеләре, шәхси эшҡыуарҙар... Мосолманлыҡ бурысын улар еренә еткереп үтәй.

Әгәр ошо "йыбаныу" ғына төп сәбәптәрҙең береһе булып торһа, һис ҡурҡыныс түгел. Үҙеңде үҙең ҡулға алырға ла була. Намаҙ ятлау, уҡыу өсөн күп көс һәм ваҡыт талап ителмәй. Кистәрен телевизорҙан шоу-тапшырыуҙар ҡарау урынына аяттар, намаҙ сүрәләре ятлаһаң, күпкә файҙалыраҡ...

Ҡәҙерле милләттәштәр, бәлки төп сәбәп икенселәлер? Йәғни, ышанмауҙалыр, йә ышанып етмәүҙәлер? Иман килтереүҙең тулыһынса мәғәнәһе ошолай:

- Аллаһтың барлығына һәм берлегенә ышаныу;
- Уның фәрештәләренә ышаныу;
- Китаптарына ышаныу (Ҡөрьән-Кәримгә);
- Бәйғәмбәрҙәренә ышаныу;
- Ахирәттең, йәғни ҡиәмәт көнөнә (ахырызаман) һәм үлгәс яңынан тереләсәгенә ышаныу.

# ҠӘҘЕР КИСЕН...

## доғаларҙа уҙғарығыҙ

**Рамаҙандың бер төнө Ҡәҙер төнө тип атала. Ҡөрьәндә уның бер кисе башҡа мең кистән хәйерлерәк булыуы тураһында әйтелә. Был төндө ғибәҙәттә уҙғара алған кеше бәхетле, ул һикһән өс йылын ғибәҙәттә уҙғарған кеүек булыр. Был Аллаһы Тәғәләнең үҙенең ҡолдарына бүләк иткән бөйөк ниғмәте. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Аллаһы Тәғәлә Ҡәҙер төнөн тик минең өммәтемә генә бирҙе, алдағы өммәттәргә ул бирелмәне", - тигән.**

Төрлө хәҙистәрҙә был ниғмәттең ебәрелеү сәбәптәре тураһында әйтелә. Ҡайһы бер хәҙистәрҙә билдәләнеүенсә, Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бүтән өммәттәрҙең оҙон ғүмерле булыуын һәм үҙенең өммәтенең ҡыҫҡа ғүмерле булыуын күргән. Әгәр ҙә Аллаһ илсеһенең өммәте башҡа өммәттәр менән яҡшы эштәрҙә тиңләшергә теләһә, был мөмкин булмаҫ ине. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күңеле төшкән. Һәм ғәҙеллек булдырыр өсөн Аллаһы Тәғәлә уға ошо төндө биргән.

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был төндә Ҡәҙер кисенең өҫтөнлөгөнә һәм изгелегенә ышанып, фәҡәт Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылып һәм уның хуплауын көткән кешенең бөтә гонаһтары ла кисерелә, тигән.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡәҙер кисенең ҡасан булыры тураһында һорашҡандар. Ул был төндө Рамаҙан айының һуңғы таҡ көндәрендә: 21, 23, 25, 27, 29 йәки иң һуңғы төндә эҙләргә ҡушҡан. Ҡәҙер төнө башҡа төндәрҙән айырылып торор, ул яҡты, аяҙ, артыҡ йылы ла, һыуыҡ та булмаҫ.

Ғәйшә (радиаллаху анху) Аллаһ илсеһенән был төндә ниндәй доға әйтергә кәрәклеге тураһында һорашҡан. "Йә, Раббым! Һин ғәфү итәһең, һин ғәфү итергә ятатаһың, шулай икән, мине лә ғәфү ит, тип доға ҡыл, - тигән уға Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

**Был мөбәрәк төндө лайыҡлы уҙғарыр өсөн түбәндәге кәңәштәрҙе тоторға тырышығыҙ:**

**1.** Ҡәҙер кисендә ғибәҙәттә булырға, уҡылмаған намаҙҙарҙы ҡаза ҡылырға, нәфил намаҙҙарын (өҫтәлмә намаҙҙар) уҡырға.

**2.** Ҡөрьәнде уҡырға, уны уҡығандарҙы тыңларға.

**3.** Бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) салауат әйтергә, уның шәфәғәтен (яҡлауын) өмөт итергә, уның өммәтенән булыуҙы яҡшылап аңларға.

**4.** Вәғәз һәм нәсихәт тыңларға.

**5.** Ҡәҙер кисенә йәки башҡа дини темаларға әңгәмәләр алып барырға.

**6.** Тәүбә итергә, нәфсене тикшерергә, хаталарҙы ҡабатламаҫҡа, тура юлға баҫырға тырышырға.

**7.** Зекер итергә, уйланырға кәрәк. Сөнки Аллаһы Тәғәләне зекер итеү менән йөрәк тыныслана, кешелә иман ҡеүәтләнә.

**8.** Күп итеп доға уҡырға. Сөнки доға - бәндәләрҙе Аллаһы Тәғәләгә яҡынлаштыра торған иң ябай саралыр. Риүәйәттәр Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡәҙер кисендә бындай доға уҡыуын һөйләй: "Аллаһүммә иннәкә ғафуввун тухиббүл-ғафвә фәғфү анни" (Аллаһым! Һин ғәфү итеүсе, ғәфү итеүҙе ятатаһың, мине лә ғәфү ит).

**9.** Ҡәҙер кисен ғибәҙәт менән уҙғарыу ҙур сауаптыр.

**10.** Был кис хөрмәтенә Раббыбыҙҙан бөтөн мосолмандарҙы ғәфү итеүен теләргә тейешбеҙ.

Ҡәҙер кисе хәйерле эштәр ҡылыу өсөн форсат булһын, ҡәрҙәшлек элемтәләрен нығытһын. Шул теләктә булайыҡ.

Киске Өфө №34, 2011 йыл



Бына ошоларҙың береһенә булһа ла ышанмаһаң, иманың камил булмай. Иманһыҙ кеше, әлбиттә, үҙен мосолман тип һанай алмай. Иманһыҙ кеше Аллаһтан ҡурҡмаҫ. Ундай кеше Ислам диненең төп ҡанундарын үтәмәһәм дә була, тип уйлай, һәм бик нык хаталана! Киләсәк мәңгелек донъяға, унда йәннәт һәм йәһәннәм барлығына ышанған кеше йәһәннәм (тамуҡ) утында янмаҫ өсөн тереклектә бөтә сараларҙы күрергә ынтылырға тейеш. Нисек итеп? Яҡшы, тәртипле, миһырбанлы, эшлекле, әҙәпле, ғөмүмән, барса яҡшы сифаттарға эйә булыу менән бер рәттән, Ислам дине закондарын да үтәргә тейеш!

Ошо мосолман ҡағиҙәләрен үтәмәү яһиллыҡтан, йәғни дини наҙанлыҡтан да булыуы мөмкин. Ләкин хәҙерге ваҡытта башҡортса йәки русса уҡый белмәгән кеше юҡ. Белергә тырышҡан кеше өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған.

Бәлки ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең үткәндәренән ҡурҡалыр? Миңә барыбер һуң, гонаһтарым күп, йәнәһе. Бәйғәмбәребеҙ хәҙистәрендә әйтелә: "Аллаһ сөбхәнә үә Тәғәлә - ғәфүрҙер, йәғни, ғәфү итеүселер. Кем дә кем ысын күңелдән Аллаһ алдында тәүбә итә икән, ул үткән гонаһтарын ҡылмаған кешегә тиңләнә".

Тимәк, милләтебеҙ башҡорт булғас, беҙ автоматик рәүештә мосолманбыҙ, тип, Ислам дине ҡағиҙәләрен үтәмәй тыныс ҡына йөрөй бирһәк - был төптән дөрөҫ түгел, ҡәҙерле милләттәштәрем! Китапта "әл әҡрәһә фид дини", йәғни, диндә көсләү юҡ, тип яҙылған. Әлбиттә, көсләп намаҙға баҫтырыу, ураҙаға күндереү - минең маҡсатым түгел. Ошо юғарыла яҙылған ябай ғына хәҡиҡәтте белмәй хаталанып йөрөгән милләттәштәремә әҙ генә булһа ла файҙам тейһен ине, тигән өмөт менән яҙам был юлдарҙы.

Һуңғы ваҡытта ураҙа һәм намаҙ организмға файҙалы, тип, медицина күҙлегенән сығып яҙған, шулай ысул менән кешене намаҙ һәм ураҙаға күндерергә ынтылған маҡсатлы мәҡәләләр ҙә күренгеләй башланы. Әлбиттә, намаҙ ваҡытындағы сәждә, ҡәғдә, рөҡуғ, ҡыям - һәр төрлө физик күнекмәләр ролен башҡарып, тәнгә, быуындарға, ҡан тамырҙарына файҙалы булыуы бик мөмкин. Ураҙаның да организмды һәр төрлө шлактарҙан таҙартыуына булышлыҡ итеүендә шик юҡ. Әммә намаҙ һәм ураҙаның төп маҡсаты - үҙенде киләһе баҡый (мәңгелек) донъяға әҙерләү. Аллаһ сөбхәнә үә Тәғәлә алдында үҙеңдең мосолманлыҡ бурысыңды үтәү!

Ысын мосолман булыр өсөн башҡорт булыу ғына етәме? Был һорауға тағы бер миҫал: Сибай "Тәҡүә" мәсетенә бер урыҫ егете йөрөй. Һәр йомала осрашабыҙ. Исеме - Әхмәт (элекке исеме Андрей). Башҡортса һөйләшә лә белмәй, хатта аңламай ҙа. Ләкин биш намаҙын ҡалдырмай, ураҙа тота. Ата-әсәһе христиан динен тота (үҙенең һөйләүе буйынса). Бына ошо Андрей - ысын мосолман тиһәк, дөп-дөрөҫ булыр...

Бәлки ошо мәҡәләне оҡшатмаусылар ҙа күп булыр. Сөнки барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе ысын мосолманға һанайбыҙ бит! Әгәр минең менән килешмәүселәр булһа, яҙығыҙ һорауҙарығыҙҙы, тәнҡитләгеҙ. Яуап бирәм. Әммә иң тәүҙә "Ғибәҙәти исламия" тигән йоҡа ғына китапты ентекләп уҡып сығыуығыҙҙы үтенәм.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

# РАМАҘАН АЙЫНДА...

## Тәрәүих намаҙы уҡығыҙ

Рамаҙан айында тәрәүих намаҙы башҡарыла. Ул 20 рәҡәғәттән тора. Был намаҙ ураҙа тотоусы, шулай уҡ ниндәйҙер сәбәптәр менән ураҙаһын ҡалдырыусы ирҙәргә лә, ҡатындарға ла сөннәт һанала. Тәрәүих намаҙын мәсеттә уҡыу - сөннәт, бының өсөн ҙур сауап вәғәҙә ителгән. Шулай ҙа был намаҙҙы бер үҙең өйҙә лә уҡырға мөмкин.

Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Рамаҙан айында был айҙың изгелегенә ышанып, һәм Аллаһы Тәғәләнең ризалығын алыу өмөтө менән тәрәүих намаҙын ҡылыусының бөтә булған гонаһтары ғәфү ителер", - тигән. Ул шулай уҡ: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙең өсөн Рамаҙан айында ураҙа тотоуҙы фарыз итте. Мин тәрәүих намаҙын сөннәт иттем. Рамаҙан айында сауап алыу өмөтө менән, ысын күңелдән ышанып ураҙа тотоусының һәм тәрәүих намаҙын ҡылыусының бөтә гонаһтары ла ғәфү ителер һәм ул яңы тыуған сабый кеүек булып ҡалыр".

Тәрәүих намаҙы тик әл-иша (йәстү) намаҙынан һуң уҡыла. Әлвитр намаҙы Рамаҙан айында тәрәүихтан һуң уҡыла. Шулай ҙа витр намаҙын тәрәүихҡа тиклем уҡырға ла мөмкин.

## Фитыр саҙаҡаһы бирергә онотмағыҙ!

**Фитыр саҙаҡаһы** - инсан өсөн мөһим ғәмәл. Ул - мосолмандарҙың был донъяға килеүе өсөн шөкөр саҙаҡаһы. Шуның өсөн ғаилә башлығына ғаиләһенең һәр ағзаһы исеменән фитыр саҙаҡаһын биреү вазифаһы йөкмәтелгән. Ул ғәйет байрамына тиклем мотлаҡ бирелергә тейеш. Фитыр Ураҙа ғәйетенең икенде намаҙына тиклем бирелә. Унан һуң биреү хәрәм һанала. Ҡөрьән-Кәримдә был турала: "Ураҙа Күк менән Ер араһында аҫылынып тора һәм фитыр зәҡәтен түләү менән ул күтәрелә", - тиелгән. Изге китабыбыҙҙа был турала шулай уҡ: "Мохтаж мосолмандарҙы үҙегеҙҙең байлығығыҙ менән ҡыуандырмайынса тороп, Аллаһтан биреләсәк ниғмәттәргә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Ул һеҙҙең нимәләрҙән саҙаҡа биргәнегеҙҙе белә", - тип яҙылған.

Фитырҙың миҡдарына килгәндә, ул, ғәҙәттә, ике тапҡыр ултырып ашау аҡсаһына (мәҫәлән, иртәнге аш менән киске аш) тигеҙ булырға тейеш. Әлбиттә, һәр кешенең иртәнге йәки киске ашҡа тотҡан аҡсаһы бер булмай. Шулай булғас, һәр кем фитыр саҙаҡаһы миҡдарын үҙенең ихтыяжына ҡарап билдәләй ала. Әгәр зәҡәтте байлыҡ эйәһе, мал эйәһе үҙе бирһә, фитыр саҙаҡаһын ғаиләнең һәр ағзаһы исеменән бирергә кәрәк. Фитыр саҙаҡаһын ярлыларға - көс-ҡеүәте булып та, алған аҡсаһы үҙенә етмәгән кешеләргә, бурыслыларға - бурыстарынан ҡотолоу өсөн мохтаж мосолмандарға, етемдәргә, ғәриптәргә, бәлә-ҡазаға эләккәндәргә, дингә хеҙмәт иткәндәргә, ватанынан йыраҡта, сит ерҙә йәшәгән кешегә, зәҡәт йыйыу һәм ҡатнашҡан кешеләргә бирергә кәрәк.

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Рамаҙан айында башҡарылған изге эштәр һәм ураҙа фитыр саҙаҡаһы үтәлмәйенсә Аллаһы Тәғәләгә барып етмәйәсәк", - тигән.

**Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты быйылға билдәләгән фитр саҙаҡаһы түбәндәгесә:**

1) Урта хәлленән түбән мосолман өсөн - һәр ғаилә ағзаһы өсөн 30 һум.
2) Урта хәлле мосолман өсөн - һәр ғаилә ағзаһы өсөн 100 һум.
3) Хәлле мосолман өсөн - һәр ғаилә ағзаһынан 200 һум.
4) Сәләмәтлеге арҡаһында ураҙа тота алмаған мосолмандар өсөн Фидиә саҙаҡаһы (хаҡ биреп алынған саҙаҡа) - 150х29 көн = 4350 һум.

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Үҙ-үҙеңде ғәйепләмә

Ғәйеп тойғоһо ла ауырыу сәбәбе булыуы ихтимал. Бынан тыш, стрестар, күңел төшөү, ҡурҡыу һәм яңғыҙлыҡ та ауырыу сәбәптәре булып тора. Эйе, һеҙ үҙ-үҙегеҙгә ауырыу саҡыраһығыҙ, ләкин аң көсөн белмәү арҡаһында ҡорбан булыуығыҙ өсөн үҙегеҙҙе ғәйепле тойорға тейеш түгелһегеҙ.

Ауырыу сәбәбе йәки һауығыуға кәртә булыусы башҡа тороштар ҙа бар: күңел төшөнкөлөгө, түбән үҙбаһа, хис-тойғоларҙы йүгәнләп тороу. Теләһә ниндәй тормош проблемаһы йәшәү ихтыярын һындырырға мөмкин. Ундай проблемаларҙың күбеһе һеҙҙең үҙгәрештәргә әҙер булыуығыҙға бәйле түгел. Мәҫәлән: ● тәбиғәт бәлә-ҡазалары һәм бәхетһеҙлек осраҡтары; ● айырым территорияларға хас көслө хөрәфәт һәм расизм; ● сәйәси тотороҡһоҙлоҡ, революциялар һәм баш күтәреүҙәр.

Махсус рәүештә иҡтисади түбән тәгәрәүҙәр, инфляция, эпидемиялар һәм пандемиялар тураһында иҫкә алмайым. Хатта бындай катаклизмдарҙан һуң да кемдер тере ҡала - тап шул "кемдер" һеҙ булыуығыҙ ихтимал.

Бында һуңғы һүҙҙе аң торошо әйтә. Ул белем йәки интеллект коэффициентына бәйле түгел. Барыһы ла, беренсенән, ынтылыштан, өмөттән һәм ышаныстан, икенсенән, үҙең менән намыҫлы эшләүҙән: көсөргәнештән арыныуҙан һәм ыңғай визуалләштереүҙән тора.

Һеҙҙең уйҙарығыҙ теләһә ниндәй урындағы, милли һәм донъяуи проблеманы хәл итеүгә үҙ өлөшөн индерә ала, әммә уны бер үҙе генә хәл итә алмай. Был турала шуға иҫкә алабыҙ: бындай өлөштө донъяуи, гармония һәм барлыҡ халыҡтарҙың именлеге хаҡына индерергә кәрәк. Беҙ нимә бирәбеҙ, шуны алабыҙ. Был юлдар аң ярҙамында үҙ тәнеңә һәм хатта ниндәй алыҫлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, башҡа кешеләрҙең тәненә тәьҫир итеү һәләтенә бағышлана.

Әгәр ҡаҙаныштарығыҙҙан ҡәнәғәтлек алырға һаулығығыҙ һәм көсөгөҙ етмәһә, тормош проблемаларын хәл итеү ниндәй файҙа килтерер? Әммә һеҙ аң көсөн тәнегеҙҙәге һүлпән ағзаларға ебәреп, уларҙың энергияһын күтәрә, яраларҙы уңалта, насар ғәҙәттәрҙән арындыра, фигурағыҙҙы камиллаштыра, ауырыуҙарға ҡаршы тороуҙы күтәрә, һеҙҙе дауалаусы табипҡа ярҙам итә, ҡыҫҡаһы, организмығыҙҙы йәшәртә алаһығыҙ.

Беренсе аҙым ниндәй булыуы тураһында аңлағанһығыҙҙыр инде. Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ. Ә хәҙер артабан нимә эшләргә кәрәклеге хаҡында һөйләшәйек.

**Аң һәм тән бәйләнеше**

Быға тиклем күҙәнәктәрҙең эшмәкәрлеген микроскоп аша күҙәткән һәм уларҙың уйҙағы бойороҡтарға яуап биргәнен күҙәткән Клив Бакстерҙың эше тураһында иҫкә төшөргәйнек. Тән күҙәнәктәре беҙҙең кәйефте белә. Уйҙар һәм хис-тойғолар күҙәнәктәр үҫкән, үлгән һәм тергеҙелгән климатты билдәләй. Ыңғай климат уларға һәм бөтөн тәнгә ныҡлы һаулыҡ килтерә, ә насары ауырыуҙарға, медиктар теле менән әйткәндә, эшкә һәләтһеҙлеккә килтерә.

16 йәшлек Шарлотта йөрәк өйәнәге үткәргән атаһы өсөн бик борсола. Һәр секунд ул телефон шылтырар ҙа, дауахананан насар хәбәр әйтерҙәр тип көтә. Бер нисә көн эсендә ул ике ҡолаҡҡа ла һаңғыраулана. Атаһы вафат була, ә Шарлотта был тетрәнеүҙән арынғандан һуң да һаңғырау булып ҡала. Бер нисә аҙнанан һуң әсәһе уны табипҡа алып бара. Гипноз трансына төшөп, Шарлотта табиптың: "Мине ишетәһеңме?" - тип һорағанын ишетә һәм: "Эйе", - тип яуап бирә. Табип уға һаңғыраулығының икенсе көнгә төш мәлендә үтәсәген әйтә. Икенсе көн тап табип әйткән ваҡытта Шарлотта алыҫ булмаған фабриканың гудогын ишетә.

**Роберт СТОУН.**



## 22 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани". Сериал
22.30 "Конец эпохи доллара"
23.30 "Побег", 18-я серия
00.35 "Безумцы". Сериал
01.20, 03.05 "То, что мы потеряли"
03.00 Новости
03.25 "Пожираемые заживо"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 122-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 150-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 227-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Каменская-6". "Вспомнить - нельзя". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Черный бог". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Красная Мессалина. Декрет о сексе"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Обыкновенное чудо". Мелодрама
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть". Док. фильм
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Стычка", "Дыра". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". Сериал
00.30 "Футбольная ночь"
01.05 "До суда"
02.05 "Один день. Новая версия"
02.40 "Проклятый рай-2". Сериал
04.40 "Петля"
05.35 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляетç"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкортостан представляет…"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости"**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Автограф". П. Шеин**
**17.00 Концерт. Поет Х. Усманов**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматов Саитовым"**
**23.30 Художественный фильм**

## 23 АВГУСТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани". Сериал
22.30 "Свидетели"
23.30 "Побег", 19-я серия. Сериал
00.35 "Безумцы". Сериал
02.25, 03.05 "Малыш-каратист". Боевик
03.00 Новости
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 123-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 151-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 228-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Каменская-6". "Простая комбинация"
22.50 "Тайны следствия". "Черный бог"
23.50 "Вести+"
00.10 "Бомба для певца. Владимир Мигуля"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Честный детектив"
02.35 "Профессия - следователь"
03.45 "Комната смеха"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Сериал
20.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Сор из избы"
00.35 "Советские биографии. Семен Буденный"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.30 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2"
05.00 "Петля". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 14.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.30 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорт йыры"**
**13.45 "Минуты поэзии"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**15.15 "Тамыр". Гора новостей и др."**
**16.15 "Автограф". Р. Туйгун**
**16.45 "Праздник курая". 1-я часть**
**17.15 Победа на Дальнем Востоке**
**19.30 XIII Республиканский конкурс исполнителей кубаира**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "За порогом"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Еду я в деревню"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 24 АВГУСТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани", 7-я серия. Драматический сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Побег", 20-я серия. Сериал
00.35 "Калифрения", 12-я серия. Драматический сериал
01.05 "Безумцы". Сериал
02.00, 03.05 "Малыш-каратист-2"
03.00 "Новости"
03.50 "Жизнь"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 124-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему"
17.50 "Институт благородных девиц", 229-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Каменская-6". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Заложники"
23.50 "Вести+"
00.10 "Тайна гибели маршала Ахромеева"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Профессия - следователь"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.35 "Сегодня"
19.05 "Расплата". Сериал
20.00 "Антиснайпер. Новый уровень"
21.50 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Рубин" (Россия) - "Лион" (Франция). Прямая трансляция
00.00 "Сегодня"
00.25 "Глухарь. Продолжение". Сериал
01.20 "Дело Крапивиных". "Снежная королева"
02.20 "Квартирный вопрос"
03.25 "Советские биографии. Сергей Киров". Док. фильм
04.30 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
05.00 "Один день. Новая версия"
05.30 "Суд присяжных"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 "Автограф". Р. Хакимьянов**
**16.45 "Праздник курая", 2-я часть**
**17.15 "Тамле" (на башк. яз.)**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм**

## 25 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани", 8-я, закл. серии. Сериал
22.30 "Побег", 21-я и 22-я, закл. серии
00.30 "360 градусов"
01.45, 03.05 "Малыш-каратист-3"
03.00 Новости
03.35 "Жизнь"
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 125-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 153-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 230-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Каменская-6"
22.50 "Исторический процесс"
00.25 "Вести+"
00.45 "Профилактика"
01.50 "Горячая десятка"
02.50 "Профессия - следователь"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата", 15-я и 16-я, закл. серии
21.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". Сериал
00.35 "Советские биографии. Михаил Тухачевский"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.10 "Проклятый рай-2"
05.00 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорттар"**
**13.30 "Волшебный курай"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Недаром помнит вся Россия…"**
**16.45 "Праздник курая", 3-я часть**
**17.15 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**19.30 "Действующие лица"**
**20.15 "Сенгелдек"**
**20.30 "Семь жемчужин"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**23.45 Художественный фильм**

## 26 АВГУСТА ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "До Ре. Лучшее"
23.20 "Закрытый показ". "Жить". Драма
01.55 "Горячие новости"
03.25 "Мальчишник: последнее искушение"
05.00 "Жизнь"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 Международный конкурс детской песни "Новая волна-2011"
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 154-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 231-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011"
22.55 "Ромашка, кактус, маргаритка". Комедия
00.50 "Ложь и иллюзии". Боевик
02.35 "Алекс и Эмма"
04.10 "В погоне за свободой"

### НТВ
06.00 "НТВ утром"
08.30 "Клеймо"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
22.40 "Антиснайпер. Выстрел из прошлого". Боевик
00.30 Футбол. Суперкубок УЕФА
02.45 "Один день. Новая версия"
03.00 "Проклятый рай-2"
05.15 "Петля"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 Киностудия "Башкортостан представляетç"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Каникулы НЕстрогого режима и др."**
**16.15 Мультфильм**
**16.40 "Сердца их бьются в унисон". Группе "Кызыл мэсет - 20"**
**17.15 "Йома"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 27 АВГУСТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Сказка о попе и работнике его Балде"
06.35 "Забудьте слово "смерть"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Богдан Ступка. Тот еще перец". К юбилею артиста
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Приговор"
14.20 "Чудом спасенные"
15.20 "Свидетели"
16.20 "Любовь одна". Драма
18.15 "Кто хочет стать миллионером" с Дмитрием Дибровым"
19.20 Большой праздничный концерт
21.00 "Время"
21.15 "Человек-паук-2". Фантастический боевик
23.30 "Шери". Драма
01.10 "Тонкая красная линия"
04.10 "Ниндзя из Беверли Хиллз"

### РОССИЯ 1
06.00 "Пираты XX века"
07.20 "Вся Россия"
07.35 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александр Сладкова
08.50 "Субботник"
09.30, 05.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный репортаж"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Гарри Поттер и узник Азкабана"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 Международный конкурс детской песни "Новая волна-2011"
16.20 "Субботний вечер"
18.15 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.15 "Зимнее танго". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Зимнее танго". Мелодрама. Продолжение
23.20 "Как я провел этим летом". Триллер
03.45 "Что хочет девушка". Комедия
05.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
06.05 "Еще не вечер". "Черный чемодан"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: Розыск!" с Ириной Волк
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Алиби на двоих". "Матрица". Сериал
15.25 "Своя игра"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Отцы". Криминальная драма
00.50 "Королевство". Боевик
03.00 "Скорая помощь"
04.50 "Алтарь Победы. Партизаны"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Пиратские острова"**
**08.50 "Третий звонок". Н. Асанбаев. "Красный Паша"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 20.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Еду я в деревню"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Забытые войны"**
**19.00 Хоккей**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**23.30 "Муз-базар"**
**00.00 Художественный фильм**

## 28 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Командир корабля"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.25 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Поединки"
14.20 "Змеелов". Криминальная драма
16.10 "Анна и король". Историческая драма
18.50 Творческий вечер Игоря Матвиенко
21.00 "Время"
21.20 "Большая разница"
22.25 "Yesterday Live"
23.20 "Какие наши годы!"
00.40 "Афера". Криминальная комедия
03.10 "Толстушки"

### РОССИЯ 1
06.00 "Ночной патруль"
07.40 "Сам себе режиссер"
08.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.55 "Утренняя почта"
09.35 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Гарри Поттер и Орден Феникса"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 Международный конкурс детской песни "Новая волна - 2011"
16.20 "Смеяться разрешается"
18.15 "Услышь мое сердце". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Страховой случай". Мелодрама
22.30 "Сильная слабая женщина". Мелодрама
00.20 "Властелин колец: две крепости". Фэнтези
03.20 "Мишель Вальян: жажда скорости"

### НТВ
05.45 "Золушка". Мультфильм
06.05 "Еще не вечер". "Сезон удачи". Сериал
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Собственная гордость"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Алиби" на двоих". "Картина"
15.25 "Своя игра"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Пугачиха. Фильм-судьба". Док. фильм
22.55 "Империя чувств"
00.05 "Адвокат дьявола". Мистическая драма
03.00 "В зоне особого риска"
03.35 "Скорая помощь"
05.25 "Один день. Новая версия"

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Долг чести"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Хазина"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.00 "Земля и люди". Док. фильм**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 Спартакиада "Башкирэнерго"**
**18.00 "Забытые войны"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Художественный фильм**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ШОМЛО ШАУҠЫМҒА БИРЕЛЕҮ...

## кризисты оҙайтыуҙың бер юлы түгелме?



**Быйыл көҙ элеккеләренә ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ һәм хәүефлерәк кризис тулҡыны буласаҡ, имеш, тигән һүҙҙәр көндән-көн ҡуйыра бара. Ысынлап та, донъя иҡтисадын тағы бер тетрәнеү көтәме? Әллә ҡайһы берәүҙәр белдереүенсә, кризис үтмәгән, ә бары тик үҙенең ҡыҫымын бушатып ҡына торған һәм уңайлы ваҡыт етеү менән донъя иҡтисадын ҡыпһыуыр кеүек һығасаҡмы? Хәлдәрҙең айышына төшөнөп ҡарайыҡ, булмаһа.**

Америкалағы ҡырҡыу ваҡиғалар бер аҙ яйланды, буғай. Юрғанына ҡарап аяғын һуҙырға өйрәнмәгән АҠШ мәсьәләне "еңел" хәл итте һәм үҙенең бурыс сиген тағы ла күтәрә бирҙе. Элек тә АҠШ-тың бюджетына ҡарағанда бурысы күберәк булды һәм улар быны шулай булырға тейеш, тип ҡабул итә башланы, шикелле. Әммә барыбер АҠШ-та хәлдәр әленән-әле ҙурая барған һәбынлы ҡыуыҡты хәтерләтә, ә уның секунды-минуты менән шартлау мөмкинлеге юғары. Оҙаҡ йылдар дауамында ҙурайып, үҙ эсенә барлыҡ хәүефле проблемаларҙы йыйып килгән "ҡыуыҡтың" шартлауы Америкала ғына түгел, ә бөтә донъяла ҡотолғоһоҙ ваҡиғаларға килтереүе бар.

Американан тыш, бөтә донъя иҡтисади баҙарындағы тағы ла бер төп "уйынсы" - Ҡытай хаҡында ла онторға ярамай. Ҡытай, Американан айырмалы, масштаблы бурыстар йыймаған, донъя финанс баҙарында ла үҙен бик ышанысы тоя һәм үҙенең милли валютаһы - юандың да хаҡын түбән тота. Ҡытай үҙендә етештерелгән тауарҙы бөтә донъяға, ә иң күбе Америкаға сығара һәм тауарҙарының арзанлығынан файҙаланып, күпләп аҡса эшләй, долларҙар йыя һәм донъяла иң ышанылы ҡиммәтле ҡағыҙ - АҠШ дәүләт облигацияларын һатып алып, үҙендә туплай (тимәк, АҠШ үҙенең облигацияларын һатып, Ҡытайҙан бурысҡа аҡса алып тора килеп сыға. Рәсәйҙең дә нәҡ шулай эшләүен иҫәпкә алғанда, бөгөнгө көнгә АҠШ-тың 14 триллион доллар бурысы ҡайҙан йыйылыуын күҙалларға мөмкин). Ә Америкалағы бөгөнгө хәлдәр Ҡытай өсөн дә бик үк күңелленән түгел, сөнки АҠШ үҙенең бюджет кризисын ҡаплау өсөн "шөрөптәрен" ныҒыраҡ борһа, был иҡе ил араһындағы тауар әйләнеше ҡырҡа кәмеп, Ҡытайҙа иҡтисади көрсөккә юл асылыуы, ә был, үҙ сиратында, иҡтисади көрсөктөң бөтә донъяны баҫып алыуына килтереүе мөмкин.

**Тик Американа шәхси сектор ҙа, дәүләт тә "ҡоласын киң йәйеп" йәшәп өйрәнгән һәм үҙенең сығымдарын ауырлыҡ менән кәметә. Американың Standard&Poor's рейтинг агентлығы эксперттары фекеренсә, АҠШ сәйәсмәндәре хатта 2013 йылдың аҙағына ла дәүләт бурысын кәметеү һәм ил бюджетын консолидациялау хаҡындағы килешеүгә килә алмаясаҡ. Ә Американың тик финанс йылы аҙағында ғына илдең йыллыҡ бюджетын раҫлауын, ә быға тиклем тик ваҡытлыса ҡарарҙар менән генә йәшәүен иҫәпкә алғанда, был илдең "тыныс холҡона" аптырарға, ә Ҡытайға артабан да тыныс күңел менән был илгә үҙенең "сифатлы" тауарын ебәрергә һәм байырға ғына ҡала.**

Донъя финансындағы хәл-торошҡа Евросоюз илдәрендә барған иҡтисади көсөргәнешлек тә тәьҫир итмәй ҡалмай, әлбиттә. Мәҫәлән, Греция, Ирландия, Португалия һәм Испанияла бурыс кризисы арта бара. Шулай уҡ май аҙағында быҒаса имен генә күренгән Данияла ла хәлдәр улай уҡ шәп түгел икәнлеге асыҡланды. Шуға күрә Евросоюзды кризистың икенсе тулҡынын тыуҙырыусы тип ҡарарға ла була, ә был илдәрҙәге иҡтисади кризис бөтә донъяға тәьҫир итмәй ҡалмаясаҡ.

**Ләкин эксперттар ышандырыуынса, Евросоюзды ныҡлы тотоп торған, иҡтисади яҡтан көслө илдәр бар һәм нәҡ улар бәләгә тарыған илдәрҙе "тартып" сығарасаҡ та инде.**

Кризистың "ҡайтыуына" көтөлмәгән факторҙарҙың да сәбәпсе булыуы бар. Мәҫәлән, бындай факторға Японияла ер тетрәүе, Исландияла вулкан уяныуы йәки ниндәйҙер үсешкән илдә хәрби конфликт ҡубыуы кеүек сәбәптәрҙе индерергә була. Ләкин Ер шарында йылына эреле-ваҡлы йөҙгә яҡын ер тетрәүе, бихисап вулкандар уяныуы һәм минут һайын ниндәйҙер илдә хәрби хәрәкәттәр башланыуын йәки әлеге ваҡытта уҡ барыуын иҫәпкә алһаҡ, кризис беҙгә көн дә янай килеп сыға.

Аналитиктар фекеренсә, кризис тулҡынының яңынан ҡалҡыуына нефтҡә генә түгел, ә алтынға ла хаҡтың күтәрелеүе сәбәпсе булырға мөмкин. Ҡайһы бер инвесторҙар бөгөн барлыҡ финанстарын алтынға һала башлауын йәшермәй. Ә был алтындың күпкә ҡыйбатланыуына һәм, үҙ сиратында, донъя иҡтисады диңгеҙенең "тулҡынланыуына һәм ярҙарынан сығыуына" килтереүе мөмкин.

**Ләкин бөгөнгә көнгә үҙенең иң юғары хаҡ түбәһенә еткән алтынды һатып алыу мөмкинселегенә донъяла бик аҙ процент кеше генә эйә икәнлеген иҫәпкә алһаҡ, был "тулҡын" донъя иҡтисадын кризисҡа "йыуып төшермәйәсәк" тип ҡарарға була.**

Банк системаһында ла хәлдәрҙе тотороҡло тип әйтеп булмай. Бөгөнгө көнгә банкылар әҙме-күпме баш ҡалҡытты кеүек, йәғни депозиттар үҫә, кредиттар ҙа күберәк бирелә башлаған һымаҡ. Ләкин был тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай күренә, сөнки банкылар милли валютаны ғына түгел, ә күпләп сит ил валютаһын да тупланы. Тик доллар һәм евро тик ятмаһын, ә "эштә" булһын өсөн уны кредит итеп таратыу зарур, ләкин бындай валютала кредит алырға теләүселәр юҡ кимәлендә. Һумдарға килгәндә лә шул уҡ хәл: аҙым һайын бер ниндәй белешмәһеҙ һәм тиҙ ваҡыт эсендә кредит юллау рекламаларына ҡарамаҫтан, банк хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, физик шәхестәр араһында ла, юридик шәхестәр һәм бәләкәй эшҡыуарҙар араһында ла кредит бурысы баҙына батырға теләк белдереүселәр кәмей бара.

Аҡсаларын әлегә тиклем Америка долларында һаҡлаусылар бөгөн аптырап ҡалды. Быға тиклем әҙме-күпме тыныс йәшәргә мөмкинлек бирген доллар иртәгә стенаға йәбештерергә мөмкин булған ҡағыҙ киҫәге генә булып ҡалмаҫмы? Аҡсаны доллардан алып евроға күсереү ҙә күңелгә тынослыҡ бирмәй. Үҙебеҙҙең һумдарҙа тотоу ҙа ҡурҡыныс кеүек. Ни эшләргә? Бөгөн был һорау рәсәйлеләрҙе иң ныҡ борсоуға һалған мәсьәлә. Әллә үҙенең аҡса берәмеген донъяның ярты алтыны менән (алтын резервы - 3 триллион доллар) тәьмин иткән Ҡытай юанына ғына күсерергәме? Тик һумдарҙы юанға алмаштырам тип, Ҡытай тиклем ергә кем китеп барыр икән? Уйлап ҡараһаң, долларҙы даими рәүештә, йыл да "ерләйҙәр", ә ул әле булһа йәшәй. Рәсәй финанс министры Алексей Кудрин фекеренсә, кәм тигәндә 20 йыл "доллар ғүмеренә бер кем дә ҡул һуҙа алмаясаҡ", ә һумға килгәндә инде, "ул 2-3 йыл дауамынды тотороҡло булып ҡаласаҡ". Шулай уҡ беҙҙең аҡса берәмеге Ҡытайҙағы кеүек алтын менән генә түгел, ә нефть һәм энергетик сығанаҡтар менән дә тәьмин ителгән. Шуға күрә күптәр аҡсаны бер-нисә валютаға бүлеп йәки алтында һаҡлау иң ҡулайлы сара тип бара. Һаҡларлыҡ аҡса ғына булһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошондай "картина" килеп сыҡты. Бында кризистың икенсе тулҡыны хаҡында түгел, ә, бәлки, "ҡаты ауырыуға" дусар булған донъя иҡтисадының "ауыр ағышы" хаҡында һүҙ алып барыу дөрөҫөрәк булмаҫмы? Йылдар дауамына һуҙыласаҡ хроник ауырыуҙың ваҡыты-ваҡыты менән көсәйеп китеү мөмкинлеген хәтерҙән сығармай йәшәгәндә һәм киҫкенләшеүен еңеләйтеү сараларын алдан эҙләгәндә, донъя имен генә торор тиган ышаныс бар. Ләкин бөгөнгө көндәге кеүек ваҡиғаларҙы үҙ файҙаһына бороп, хәлдәрҙе ҡуйыртырға тырышыусылар күбәйһә, ваҡиғаларҙың ҡатмарланып китеүе лә бик мөмкин.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

ЕНӘЙӘТИ ДОНЪЯ



# ЙӘНӘШӘЛӘ...

## бурҙар ҙа, муттар ҙа бар

● **Республика баҫыуҙарындағы ҡыҙыу ураҡ осоро полиция хеҙмәткәрҙәре эшенә лә көсөргәнешлек өҫтәй. Йыйып алынған уңышты урлауҙан һаҡлау - хоҡуҡ һаҡсыларының электән килгән хәстәре.** Ашлыҡ йыйылған ерҙән элеваторға тиклемге юл һәр ваҡыт полиция хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында. Баҫыуҙан сыҡҡан ерҙә еңел һәм йөк машиналары мотлаҡ рәүештә тикшерелә. Ауыл хужалығы тауарҙарын, запас частәрҙең һәм ягыулыҡ-майлау материалдарының юғалыуын иҫкәртеү үҙ һеҙәмтәләрен бирә башлаған да инде. Август башынан алып республикала ошо өлкәлә 16 урлау осрағы теркәлгән, шуларҙың 11-нә енәйәт эше ҡуҙғатылған. Ваҡ урлауҙар өсөн 43 административ протокол төҙөлгән.

● **Өфөнөң Калинин районы полиция бүлегенә яңы тыуған ҡыҙ бала табылыуы хаҡында хәбәр ителә. Бер-нисә сәғәт элек кенә тыуған бала бер ниндәй төргәкһеҙ полиэтилен тоҡ эсендә ятҡан була.** Баланың әсәһен эҙләү һөҙөмтәләре килтермәй. Һуңғараҡ ҡала дауаханаларының береһенә бәпесләүҙән һуң өҙлөккән 16 йәшлек мәктәп уҡыусыһын алып килләр. Ул бер нисә сәғәт элек өйҙә яңғыҙы бала табыуын һәм әсәһенән ҡурҡып, баланан ҡотолорға тырышыуын таный. Хәҙер бәпес һәм уның әсәһе врачтар ҡарауы аҫтында. Уларҙың һаулығына хәүеф янамай. Полиция тарафынан йыйылған материал, юридик баһа биреү өсөн, Башҡортостан Республикаһы буйынса Тикшереү комитетына ебәрелгән.

● **Рәсәй кешеһе ҡапыл һәм ныҡ байығыу мөмкинлеге булыуына тиҙ ышана. Нефтекамск ҡалаһы "Восход" финанс пирамидаһы клиенттарын да шулар рәтенә индерергә мөмкин, сөнки улар кассаға һалынған аҡсаларын 21 көн эсендә 95 процент өҫтәмә менән кире ҡайтарырға өмөт итеүселәр.** Нефтекама ҡалаһы хоҡуҡ һаҡлаусылары тарафынан Илдар Ғәбәев һәм Владимир Строговҡа, Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексының 159-сы статьяһының 4-се бүлегенә ("Айырыуса ҙур күләмдәге мутлашыу") ярашлы енәйәт эше ҡуҙғатылған. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса 5460 кеше "Восход" финанс пирамидаһы эшмәкәрлегенән зыян күреүсе тип табылған, ә кредит-кулланыусы кооперативында иҫәптә торғандар һаны иһә 34 меңгә етә. Шуларҙан 10 мең кеше үҙ аҡсаһын ҡайтарып алыуға өлгәшкән, ә 208 миллион тирәһе аҡса "елгә осҡан". Яҡын арала башланасаҡ суд ултырыштары аҡсаларҙы кире хужаларына ҡайтарыуҙы күҙаллаған ҡарар сығарған хәлдә лә, бөтә сумманы тулы килеш бер кем дә ала алмаясаҡ икәнлеген бөгөн үк асыҡ әйтергә була. Ә вәғәҙә ителгән проценттар хаҡында бөтөнләй онторға ла мөмкин.

✓ *Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.*

*(Бальтасар Грасиан).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТАЛАНТТАРҒА...

## юл асыусы "Яңы исемдәр"

**Башҡортостандың талантлы йәштәре ижади һәләтен тормошҡа ашыра һәм хатта үҙҙәрен тотош донъяға таныта аласаҡ. Быйыл республикала үтәсәк "Яңы исемдәр" беренсе хит-парадын ойоштороусылар тап ошо маҡсатта эшләйәсәк әр-яңы проект тәҡдим итә.**



Бындай масштабтағы шоу-проект Башҡортостанда беренсе тапҡыр уҙғарыла. Хит-парадты "Русское радио", "Үҫеш технологиялары" имидж компанияһы һәм "Sokurov production" продюсер үҙәге БР Мәҙәниәт министрлығы, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте ярҙамында ойоштора.

Конкурстың шарттары ҡатмарлы түгел. Проекттың авторы Андрей Сокуров белдереүенсә, иң мөһиме, ҡатнашырға теләк белдереүсенең тәбиғи һәләте булырға тейеш.

- Беҙ әлегә тиклем тамашасыға билдәле булмаған талантлы артистарҙы эҙләйбеҙ. "Яңы исемдәр" беҙҙең өсөн проект ҡына түгел, ә һәләтле йәштәрҙе эҙләп табыу һәм уларға ярҙам итеү буйынса тотош бер программа. Республика бындай кешеләргә бай, тип иҫәпләйбеҙ һәм был проект уларға киләсәктә донъяның иң яҡшы майҙандарында сығыш яһарға мөмкинлек бирәсәк, - ти "Үҫеш технологиялары" имидж компанияһының генераль директоры Андрей Сокуров.

Проектҡа 15 йәштән 35 йәшкә тиклемге егеттәр һәм ҡыҙҙар ҡабул ителә. Абруйлы баһалау комиссияһы уларҙың араһынан иң яҡшы бейеүсене, йырсыны, музыкантты, оригиналь йәки һөйләү жанрындағы артисты билдәләйәсәк. "Яңы исемдәр" проектының шарттары буйынса, унда ҡатнашыусыларҙың сығышы заманса сәнғәт форматына тап килергә тейеш, классик йәки халыҡ йырҙары, бейеүҙәренән торған программалар проектҡа алынмаясаҡ. Ниндәй телдә сығыш яһарға икәнлеген ҡатнашыусы үҙе хәл итә.

Конкурс бер нисә этаптан тора. Уның беренсе этабы - кастингтар республиканың Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекамск, Октябрьский ҡалаларында үтә. Әйткәндәй, улар 22 сентябрҙә старт аласаҡ. Икенсе этапта ҡатнашыусының сығышы яҙҙырылған видео һәм аудиофайлдар хит-парадтың интернет битендә үҙҙәренең шәхси профайлына һалынасаҡ. Сайтҡа инеүселәр ҡатнашыусылар өсөн ошонда уҡ тауыш бирә аласаҡ. Өсөнсө тур - конкурстың һайлап алыу өлөшө. Өсөнсө этаптың финалистары гала-концертта ҡатнашыу хоҡуғына эйә буласаҡ. Гала-концертҡа әҙерләнеү барышында финалистар менән профессиональ хореографтар, вокалистар һәм имиджмейкерҙар шөғөлләнәсәк.

Әйткәндәй, проект авторҙары хит-парадтың еңеүселәрен яҙмыш ҡосағына ташлап ҡуймаясаҡ, ә уларҙың артабанғы үҫешенә ярҙам итәсәк. Шуға ла, әгәр ҙә һеҙ заманса бейеүҙәрҙе оҫта бейейһегеҙ, заманса йырҙарҙы шәп башҡараһығыҙ, йәки һәләтле актер икәнһегеҙ, "Яңы исемдәр" хит-парадында ҡатнашығыҙ, бәлки, тап һеҙҙең исемегеҙ Рәсәй сәнғәтенә әр-яңы һулыш өҫтәп, уны балҡытып ебәрер.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМДӘРЕ ЛӘ ҠЫУАНДЫРА,

## ҡыланыштары ла матур ғына...



**Мин "Атың кем?" рубрикаһы аҫтында сыҡҡан исеме матур балалар тураһындағы мәҡәләләрҙе гел генә уҡып барам һәм үҙемдең дә ейәнем һәм ейәнсәрем тураһында яҙып ебәрергә булдым.**

Фотола ысын ир-егеттәрсә һеңлеһенең ҡулын тотоп тороусы егет - Арыҫлан, ә йылмайып, йыуанып ултырыусы ҡыҙ уның һеңлеһе Рәҡыя була. Улар Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе балаларыбыҙ: ҡыҙыбыҙ Ләйсән һәм кейәүебеҙ Илшат Аҡбулатовтарҙың балалары. Арыҫланға июндә 3 йәш тулды, ә Рәҡыя 10 айлыҡ ҡына әле.

Баймаҡ элек-электән талантлы кешеләре менән дан ҡаҙанған. Баймаҡта тыуғангамы, әллә атаәсәһенән күрәме (икеһе лә бейейҙәр), Арыҫлан бик матур бейей. Ҡартатаһына оҡшап, хәҙерҙән үк сүкеш-балтаны бик килешле тота. Арыҫлан тамағына ашап туйғас, битен һыйпап, "Амин. Аллаһу әкбәр" тип әйтеп ҡуя. Бик асыҡ әйтмәһә лә, ул был ғәмәлде бик бәләкәйҙән эшләне.

Ә Рәҡыя бик шуҡ ҡыҙ булып үҫеп килә. Улар берберенен бик яраталар. Арыҫлан ағай булып әүрәткән була һеңлеһен.

Мин ейәнемә һәм ейәнсәремә, уларҙың ата-әсәһенә лә оҙон-оҙаҡ ғүмер, ныҡлы һаулыҡ, балаларын тыуған илгә лайыҡлы кешеләр итеп үҫтереүҙәрен теләйем.

**Земфира БИЛАЛОВА.**
**Баймаҡ районы Йылайыр ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САҠЫРЫЛМАҒАН ҠУНАҠ...

## юнмаған таяҡ

Дөрөҫлөк үҙе генә еңеү яулай алмағас, ярҙамға ялғанды саҡырған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп дарыуҙарҙың файҙаһыҙ икәнен аңлаған врач ҡына ысын врач.

**(Бенджамин Франклин).**

Хаталарҙан азат кеше тормошта бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәк.

**(Иоганн Гете).**

Алданыуҙан ҡурҡып йәшәгәндәр бер ваҡытта ла хәҡиҡәткә юлды таба алмаҫ.

**(Е. Кайоран).**

Үҙ һүҙеңдә тороуҙың иң яҡшы ысулы... ул һүҙҙе бөтөнләй бирмәү.

**(Наполеон Бонопарт).**

Донъяны үҙгәртеп була... кешенең үҙен үҙгәртеп кенә.

**(Фарсы мәҡәле).**

Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.

**(Бальтасар Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер ауылда бер туған ике ағай-эне йәшәгән. Бер-беренә ни тиклем генә оҡшаш булмаһындар, уларҙы айырып торған нәмәләр ҙә булған. Мәҫәлән, кесеһенең тормошта барыһы ла көйлө барған, икенсеһен, өлкәнен, гел генә уңышһыҙлыҡтар һағалап торған.**

**Бер саҡ эне кеше ағаһына килә һәм уның бар эшләгәне уңышһыҙ килеп сыҡҡанын аңлап, шундай һорау бирә:**

**- Ағай, һин үҙеңдең тормошонду үҙгәртеү, эштәреңде көйләү өсөн ниҙәр ҡылаһың?**

**- Көн-төн эшләйем дә эшләйем...- тип яуаплай ағай кеше.**

**-Ә хеҙмәтең һиңә шатлыҡ килтерәме һуң?**

**- Юҡ, шатлыҡ килтермәй һәм һәр эште башҡарыу ауырға тура килә, - ти ағай кеше башын түбән эйеп.**

**- Ә һин үҙ эшеңдән шатлыҡ эҙлә, - ти энеһе. - Хәтереңдәме, бала саҡта һин балсыҡтан төрлө һындар яһарға ярата инең? Шунан башла ла: ихатаңды балсыҡ һындар менән биҙә...**

**Бер йылдан ағай менән эне тағы осрашалар. Энеһе ағаһынан:**

**- Хеҙмәтеңдә шатлыҡ табырға өйрәндеңме, ағай?**

**- Эйе, шатлыҡ бар ҙа ул, әммә барыбер уңышһыҙлыҡ һағалап тик тора...- тип яуаплай ағаһы.**

**- Эш эшләгәндә нимә тураһында уйлайһың һуң?**

**- Ана шул миңә һөжүм итәсәк уңышһыҙлыҡтар тураһында инде... - ти ағай кеше... "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 3262